✓ ***Почтальондар иғтибарына! 2014 йылдың беренсе яртыһына гәзитебеҙгә яҙылыу тамамланып барған әлеге мәлдә шундай тәҡдим: кем дә кем 50-80 дана "Киске Өфө"гә яҙҙырған, улар беҙҙең матур бүләктәргә (кәрәҙле телефон, микротулҡынлы мейес, электр ит турағысы, блендер һ. б.) лайыҡ буласаҡ. Бүләктәрҙе алыу өсөн почтальондың үҙе яҙҙырған квитанцияларҙың күсермәләрен редакцияға ебәреүе шарт.***


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

21 - 27 ДЕКАБРЬ (АҠЪЮЛАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№51 (573)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Бәндәгә бәндә булма**



3

**Һәр саҡ айыҡ йәшәргә!**

Бәйге ошо гәҙәтте гәҙәткә индерә



4

**Йәштәребеҙ аңында...**

илһөйәрлек булһын, тип



6

**Ул һүҙҙең солтаны**

Ул һүҙҙең ҡоло ла!



8-9

14 ТВ-программа


*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Ваҡытлы матбуғат баҫмаларына яҙылыу тамамлана. Киләһе йылды ниндәй гәзит-журналдар менән ҡаршылаясаҡһығыҙ?

***Мәүлит ЯМАЛЕТДИНОВ, яҙыусы, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Муса Мортазин исемендәге әҙәби премия лауреаты:*** Ғүмер буйы уҡып өйрәнелгәс, бер генә көн гәзит-журнал уҡымай торһаң да ҡыйын, күңел урынында булмай. Беҙҙең быуын һәм, ғөмүмән, әҙәбиәт, мәҙәниәт өлкәһенә мөнәсәбәте булғандар ҡағыҙ баҫмаһыҙ йәшәй алмай инде ул. Электрон мәғлүмәт саралары ни тиклем генә үҫешкән булмаһын, яҙма матбуғат баҫмаларына ихтыяж кәмемәй, гәзит - гәзит булып ҡала барыбер. Унан бит гел генә телевизор ҡарап йә интернетта ултырып та булмай, ә гәзит-журнал һәр саҡ ҡул аҫтында, һәр саҡ эргәлә. Мин үҙем, мәҫәлән, "Киске Өфө"гә яҙылмай ҡалғаным юҡ. "Башҡортостан", "Йәшлек" гәзиттәрен, "Агиҙел", "Ватандаш" журналдарын да яратып уҡыйым. Яҙма матбуғат баҫмаларына яҙылыуын яҙылабыҙ ҙа ул, тик бына почтаның насар эшләүе йыш ҡына кәйефте боҙоп ҡуя. Бында мин үҙебеҙҙең почтальондарҙы яманларға йыйынмайым, бөтөн ил буйынса почта эше "ҡомға" килеп терәлде бит. Икенсенән, район үҙәктәрендә яңы микрорайондар үҫә, ә почтальондар штаты артмай. Әле күптән түгел генә илдәге почта хеҙмәте тураһында Рәсәй Хөкүмәте кимәлендә һүҙ булды, тимәк, яҡын арала был өлкәлә ыңғай үҙгәрештәргә өмөт итергә булалыр, тигән уйҙамын.

Гәзит-журналдарыбыҙ хаҡында һүҙемде дауам итеп, тағы ла шуны әйтмәксемен: "Киске Өфө"нө хәҙер нисә йылдар алдырып уҡып, тәм тойғас, унан айырылыу юҡ инде. Был баҫма төүге һандарынан уҡ үҙенең ғәҙәти гәзиттәрҙән айырылып тороуы, идея-тематикаһының ныҡлы уйланған булыуы менән күптәрҙең иғтибарын йәлеп итте. Был сифаттары менән ул үҙенең айырым бер тәғәйенләнеше барлығын - халҡыбыҙҙың рухиәтен күтәреүсе һәм тәрбиәләүсе сифатында мәғлүмәт яланына сығыуын раҫланы. Уның биттәренән бөтә быуын вәкилдәре лә үҙ темаһын табып уҡый ала. Хәйер, "Киске Өфө"лә күтәрелгән рухиәт, тәрбиә, әхлаҡ проблемалары йәш айырымлығын күҙҙә лә тотмайҙыр, бәлки, сөнки был темалар - мәңгелек һәм быуындан-быуынға күсә килеп, һис бер иҫкермәй торған дөйөм кешелек ҡиммәттәрен һеңдерә барса күңелдәргә лә. Халҡыбыҙ тарихының ошоғаса билдәһеҙ ҡалып килгән биттәрен асыҡлап, аныҡлыҡ индереүҙә төплө белемле ғалимдарыбыҙҙы гәзиткә йәлеп итеү баҫманың мәртәбәһен күтәрә, объективлығына баҫым яһай. Шуға күрә лә, уҡытыусылар әйтмешләй, гәзит дәрестәрҙә өҫтәмә ҡулланма итеп уңышлы файҙаланыла. Иманға ҡайтыусы мосолмандарыбыҙ өсөн дә мәғлүмәт сығанағы ул.

***Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНА, Бөрйән районы "Таң" гәзите хәбәрсеһе:*** Бөгөнгөһөнә генә түгел, үткәненә лә, киләсәгенә лә битараф булмаған кеше бөгөн гәзит-журналға ла битараф түгелдер, тигән уйҙамын. Матбуғат өлкәһендә эшләгән кеше булараҡ, тормошомдо, булмышымды, ғөмүмән, гәзит-журналһыҙ күҙ алдына ла килтерә алмайым. Бер гәзит тә алдырып уҡымаған кешенең өйө лә нурһыҙ, ҡотһоҙ булалыр һымаҡ тойола миңә. Гәзит бит ул һағынып, көтөп алынған ҡунаҡ кеүек. Шул уҡ ваҡытта ул беҙҙе донъяла булып ятҡан хәл-әхүәлдәр менән дә таныштыра, тормошта булып торған теге йәки был хәлдәрҙә дөрөҫ ҡарарға килергә, кәрәкле йүнәлеш алырға ярҙам итә, йәшәүгә көс, дәрт бирә. Ошо йәһәттән мин үҙем сыға башлағанынан бирле яҙылып, алдырып уҡып килгән "Киске Өфө" тураһында бер кәлимә һүҙ әйтеп китергә теләр инем.

Милләтебеҙгә - тереһыу. "Киске Өфө" гәзитен ҡыҫҡаса ҡылыҡһырлағанда нәҡ ошолай әйтеп булалыр, тим. Гәзит "Нимә? Ҡайҙа? Ҡасан?" һорауҙарына яуап биреп кенә ҡотолоуҙан күптән алыҫ. Уның маҡсаты - үткәнде онотороға ирек бирмәү, бөгөнгөнө дөрөҫ баһалау, киләсәккә юл-юҫыҡ күрһәтеү. Бөгөн беҙҙең күбебеҙ Мостай Кәримдең Әлфиәһе хәлендә - "те яҡҡамы, бы яҡҡамы", тип аптырап-албырғап торғаны. Нәҡ ошондай мәлдә "Киске Өфө" үҙенә күрә халҡыбыҙға ҡотҡарыу түңәрәге, рух ҡәғбәһе, юлын яҡтыртыр сыраҡ. "Киске Өфө"нөң тағы бер матур яғы бар: телебеҙ һағына ихласлап баҫты, диалект һүҙҙәренә ысынлап ирек бирҙе, тел гәүһәрҙәрен дөйөм һөйләшкә индереп ебәреү йүнәлешендә маҡсатлы эшләй. Ил-көн яңылыҡтарын да ялҡытҡыс дежур һүҙҙәр менән бирмәй, ә әйтер һүҙенең кәттәһен тас башҡортса килеш еткерә.

"Көн күргән шөғөл" рубрикаһы боронғо һәм хәҙерге кәсептәр ярҙамында аҡса һуғырға, сереп байып уҡ китмәгәндә лә, һоранмай йәшәргә өйрәтә. "Милли идеяға торош" рубрикаһы тормошҡа икенсерәк ҡарарға, башта эшләтеп фекер йүгертергә, хәҡиҡәт эҙләп аңында ҡаҙынырға, ғәфләт йоҡоһонан уянырға булышлыҡ итә. Башҡорт халыҡ мәҡәлдәренә Әхмәр Үтәбайҙың тәфсире - файҙалы ғилем генә түгел, аҡыл ҡаҙнаһы, уй төйөнө, һүҙ ғилләһе лә. Уларҙы уҡып, халыҡ мәҡәлдәренең асыл асылын аңлайһың, тотош аҡыл һәм быуаттар дауамында тупланған күҙәтеү-тәжрибәнән тупланған фекер төйөнө икәнлегенә төшөнәһең. Гәзиттең олоһон да, кесеһен дә ҡыҙыҡтырыр рубрикалары, йоҡоно уятыр үҙ тауышы, рухһыҙҙың сөмен ҡужғытыр саялығы, телһеҙҙе моңландырыр бәҫле теле, юлһыҙҙы юҫыҡландырыр маяҡ-сырағы - илгә һибер Тереһыуы бар. Уның ҡәҙерен беләйек, яҙылып, яҙҙыртып баһаһын арттырайыҡ.

***Нурия ҠУНЫСБАЕВА, Ейәнсура районы:*** 2004 йылда "Киске Өфө" гәзитенең бер һаны күҙемә салынғайны, шунан бирле уны ҡулымдан төшөргәнем юҡ. Ул минең өсөн "беренсе ярҙам". Сығыш яһар алдынан фекер туплар өсөн, уның ниндәй ҙә булһа бер һанына күҙ ташлау етә. Мин Ейәнсура башҡорт гимназияһында "Кош юлы" журналистика түңәрәген етәкләйем. Уҡыусыларымдың дәфтәрҙәрендә "Киске Өфө" гәзитенән алынған фәһемле фекерҙәр өҙөлмәй. Төрлө саралар үткәрер өсөн уҡытыусылар һәр саҡ уларға мөрәжәғәт итә. 2014 йылдың беренсе яртыһына октябрь айында уҡ яҙылып ҡуйғанмын. "Киске Өфө", "Башҡортостан", "Ейәнсура таңдары" гәзиттәрен даими рәүештә алдырам. "Киске Өфө" гәзитенә рәхмәтлемен: ул миңә фекер төйөнө лә, аҡыл бағанаһы ла, рух терәге лә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**



Иылайыр ағинәйҙәре.

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# ҺАЛМА ҺАТАМ...



**"Киске Өфө" гәзитен күптән алдырам. Бөтә яҙылған темаларҙы ла бер-нисә тапҡыр уҡыйым, уйланам, фәһем алам, фекер алышам. Миңә бигерәк тә эшҡыуарлыҡ темаһына яҙылған мәҡәләләр яҡын. Шулай уҡ "Әйҙә, аҡса эшләйек!" рубрикаһы аҫтында сыҡҡандарын да ҡыҙыҡһыныу менән уҡып барам. Заманы ла шундай бит: ҡайҙа боролма, ҡайҙа баҫма - аҡса.**

Мин үҙем бер йыл элек хаҡлы ялға сыҡтым. Пенсия килеп торһа ла, өҫтәмә аҡса эшләү тураһында оҙаҡ уйланым. Һәм таптым. Аҙыҡ-түлек һатылған магазин, кафе хужалары менән һөйләштем дә, һатыуға өй һалмаһын (Әбйәлил районында шулай әйтелә, ҡайһы бер яҡтарҙа туҡмас тип йөрөтөлә) сығара башланым. Эш ҡатмарлы ла, ауыр ҙа түгел, шулай уҡ һәр ҡатын-ҡыҙға таныш. Әҙерләү өсөн тотонолған аҙыҡ-түлек тә ҡыйбатҡа төшмәй. Иртән тороп ҡайҙалыр эшкә лә барырға кәрәкмәй, үҙеңдең ваҡытыңа, теләгеңә ҡарап эш итәһең. Шулай уҡ һалма ҡырҡыу өсөн махсус ҡоролманың булыуы ла эште күпкә еңеләйтә. Ул ҡоролманың хаҡы яҡынса 350-550 һум, бер тапҡыр алһаң, ғүмер буйына етәсәк. Әҙерләнгән һалманы яртышар, берәр килограмлап үлсәп һалам. Хаҡтары, ярашлы рәүештә, 70 һәм 140 һум. Бер эшләгәндә кәмендә 5-6 килограмм һалма ҡырҡам. Аҙнаһына бер-ике көнөмдө генә ошо эшкә бүлһәм дә 2000 һум тирәһе аҡса килә, тигән һүҙ. Минең район үҙәгендә йәшәүем дә уңайлы, әлбиттә, сөнки тауарҙы үткәреүе еңелерәккә тура килә. Магазин, кафеларҙан тыш, айырым заказдар ҙа йыш була. Әбйәлил районы табындарында бишбармаҡ төп урынды алып тора, шуға күрә һалма ла күп кәрәк. Йәштәребеҙ ҙә борондан килгән аш-һыуҙарҙы урын-еренә еткереп бешерә һәм бишбармаҡты тәүге урынға ҡуя. Ә эшләп йөрөүсе йәштәрҙең ваҡыттары ла тар булып китә һәм ошондай саҡта миңә мөрәжәғәт итәләр. Ә оло йәштәгеләргә был эште атҡарып сығыу ауырға төшә һәм улар ҙа минән килеп һалма алып китә. Бөтә күңелемде, бар оҫталығымды һалып эшләйем. Был, үҙ сиратында, эштең ырамлы барыуына һәм сифатлы булыуына килтерә. Бындай тауарҙы тәҡдим иткәндә кеше алдында йөҙөң дә яҡты була.

Бына ошондай, үҙемә күрә арыу ғына килем килтергән, бәләкәй "эшҡыуарлыҡ" менән шөғөлләнәм. Ә етди, ҙур эшҡыуарлыҡ - ҡыйыу, сос, замана менән бергә атлаусы, аҡыллы йәштәр эше.

**Фәһимә АБДУЛЛИНА.**
**Әбйәлил районы.**

ИШАРА

# ХИКМӘТ ИСЕМДӘМЕ НИ...

**Балалар был донъяны танып белергә теләп, ололарға бик күп һорауҙар яуҙыра. Ҡайһы берҙәренә яуап тапмай, аптырап та ҡалаһың хатта.**

Әле мәктәп йәше лә етмәгән ҡыҙым менән күршеләрҙә ҡунаҡ булып ҡайтып индек үҙебеҙҙең фатирыбыҙға. Мин уны: "Балам, беҙ Галя апайға инһәк, һине уларҙан алып ҡайтып булмай. "Әйҙә, ҡайтайыҡ!" тип бер нисә тапҡыр саҡырам, ә һин тыңламайһың. Бер әйтем дә бар бит: ҡунаҡҡа саҡырыу сәғәтен өй хужаһы белә, ә ҡайтып китеү сәғәтен ҡунаҡ белергә тейеш", - тип тәрбиәләп маташам. Шул саҡ ҡыҙым ҡапыл: "Әсәй, ә ниңә Галя апайҙарҙың стеналарында матур келәм, дивандарында ла келәм, иҙәндәрендә лә келәм, ә беҙҙең өйөбөҙҙә бер келәм дә юҡ?" - тип һораны. Был көтөлмәгән һорауҙы ишетеп, бөтөнләй ҡаушап ҡалдым. Нимә тип яуап бирергә белмәй, ашығып уйланам. Шул саҡ ҡыҙым оҙаҡҡа һуҙылып киткән тынлыҡты боҙоп, әллә минең ҡаушауымды һиҙепме, ярҙамға килде: "Ярай инде, әсәй, беҙҙең келәм ҡаға торған "хлопушкабыҙ" бар бит", - тип ысҡындырмаһынмы. Был көтөлмәгән йыуатыуҙы ишетеп, рәхәтләнеп көлөштөк ул саҡ...

Ҡыҙымдың ошондайыраҡ һорауҙарына нисектер яуап бирергә тырышам тырышыуға. Әммә өлкәндәр тарафынан бирелгән һорауҙар алдында ҡайһы саҡта ҡаушап ҡалырға ла тура килә. Бигерәк тә күршемдә генә йәшәгән 82 йәшлек Тәнзилә апайҙың һорауҙары ҡаҡшата, яуап эҙләп йонсойом. Тәнзилә апай бер көндө магазинға шәкәр һатып алырға барған да, бер оло йәштәрҙәге ирҙең: "Бәй, шәкәрҙең дә милләте бар икән!" - тип ҡысҡырып уҡ ғәжәпләнеүенә аптыраған. Ысынлап та, ул шәкәрҙең ҡабына "Русский сахар" тип яҙылған булған икән. "Ниңә "Русский снег", "Русская зима" һуң ул? - тип аптырап, шәкәрен тотоп килеп ингән Тәнзилә апай. - Шәкәр сөгөлдөрө Башҡортостан, Татарстан баҫыуҙарында сәсеп, тәрбиәләп үҫтерелә ләһә..." Ләкин мин уның был ябай ғына һорауына ла яуап таба алманым.

Тәнзилә апай ҡайтып киткәйне, "Хәмит күпере" хикәйәһе иҫемә төштө. Уны мәктәптә уҡыған йылдарҙа уҡығайным. Бер атай был яҡты донъя менән хушлашыр алдынан ике улын саҡырып алған да: "Ер йөҙөндә исемегеҙ ҡалырлыҡ итеп йәшәгеҙ!" - тигән васыят әйткән, ти. Хәмит исемле улы һәр кешегә тигәндәй ярҙам итеп йәшәгән, ә икенсе улы Вәлит бик ялҡау булған. Тик атаһының һүҙҙәрен иҫендә тотоп, Хәмит башҡарған эштәргә йәһәт кенә "Вәлит" тип үҙ исемен яҙа ла ҡуя, ти. Бер саҡ Хәмит халыҡтың яфа сигеүен күреп, йылға аша күпер төҙөү эшенә тотонған. Бөтә халыҡ был изге эште башҡарыуға Хәмиткә ярҙамға килгән. Ныҡ нигеҙле күперҙе төҙөп бөтөрөүҙәре булған, Вәлит йәһәт кенә килеп, ҙур хәрефтәр менән үҙ исемен күпергә яҙып та ҡуйған, ти. Йылдар үтеү менән ул яҙыу юйылған, ә халыҡтың хәтерендә әле һаман (күп тапҡыр төҙөкләндерелһә лә) "Хәмит күпере" тип атала икән ул күпер. Исемеңде ҡайҙа ғына яҙып яфаланма, ысын изгелек ҡылыусыһының исеме халыҡ хәтерендә мәңгелеккә уйылып ҡалыусан. Хәтер ул яҙыуҙарға ҡарағанда ла ғүмерлерәк...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының тағы бер миҙгеле тамамлана.**

• Шулай итеп, 2014 йылдың беренсе яртыһына 50665 индекслы **"Киске Өфө"** гәзитенә **384 һум 36 тингә**, 50673 индекслыһына (предприятие һәм ойошмалар өсөн) 414 һум 36 тингә яҙылырға була.

Декабрҙә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе иң тәүге 2 уҡыусыбыҙ - **башҡортса "Ҡөрьән Кәрим"**, 2 уҡыусыбыҙ - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 10 уҡыусыбыҙ - **Ноғман Мусиндың "Алдар батыр"**, 10 уҡыусыбыҙ - **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**, 10 уҡыусыбыҙ 2014 йылға **"Башҡортса дини календарь"**, 10 уҡыусыбыҙ **Гөлфиә Янбаеваның "Елле фекерҙәр елгә осмаһын"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.



• Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы **тыуған көнө менән ҡотлау** - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

• **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:**

• Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге **"Өфө-матбуғат"** киоскыһында 6 айға **330 һумға** яҙыла алаһығыҙ - почта йәшниге юҡ, тип һылтанырға ла кәрәкмәй, аҙнаһына бер тапҡыр шәмбе көндө ошо киоскынан ғына сығаһығыҙ ҙа алаһығыҙ.

• **Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ** (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға - **246 һум.**

• **Яҡын йәшәгәндәр** редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - **246 һум**.

• **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

• Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың сираттағы пленар ултырышы 26 декабрҙә үткәрелә. Парламент спикеры Константин Толкачев һүҙҙәренә ҡарағанда, ултырышта Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов республика парламентарийҙарына йыллыҡ Мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһаясаҡ.

✓ Дәүләт милке менән идара итеү буйынса федераль агентлыҡтың Башҡортостан Республикаһындағы Территориаль идаралығы бер нисә мәҙәни мираҫ объектын республика милкенә тапшырыу өсөн документтар әҙерләгән. Һүҙ Өфөләге Дуҫлыҡ монументы, Салауат Юлаев һәйкәле, ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәев бюсы, шулай уҡ Шишмә районындағы Хөсәйенбәк һәм Турахан кәшәнәләре тураһында бара. Рәсәй Хөкүмәте бойороғо менән был объекттар урындағы кимәлгә тапшырырға кәрәкле объекттар исемлегенә индерелде.

✓ Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов үткәргән республика Хөкүмәте ултырышында Башҡортостан Республикаһында фәнде үҫтереү проблемалары тикшерелде. Билдәләнеүенсә, Башҡортостан үҙенең органик химия, Евразия халыҡтарының этногеномикаһы, генетика, үҫемлектәр селекцияһы һәм тупраҡты өйрәнеү, комплекслы анализ һәм функциональ тигеҙләмәләр буйынса ҙур фәнни мәктәптәре менән билдәле, офтальмология, наноматериалдар һәм нанотехнологиялар, торба үткәреү транспорты, авиация, нефть, транспорт машиналары эшләү өлкәһендә тикшеренеүҙәр яғынан танылған лидерҙар иҫәбендә.

✓ Мәскәү Халыҡ-ара сауҙа үҙәгендә Рәсәй Президенты Владимир Путиндың матбуғат конференцияһы үтте. Сараға 1300-ҙән ашыу Рәсәй һәм сит ил журналистары аккредитацияланған. Осрашыуҙа "Башинформ" агентлығы, БЮТ телеканалы, "Вести FM Уфа" радиостанцияһы, "Панорама Башкортостана" журналы журналистары ла ҡатнашты.

✓ Республиканың төп Яңы йыл иртәһе - Башҡортостан Президенты шыршыһы, алдан иғлан ителгәнсә Башҡорт дәүләт аграр университетының Йәштәр һарайында түгел, ә Химиктар мәҙәниәт һарайында үтәсәк. Үткәреү датаһы үҙгәрешһеҙ ҡала - 23 декабрь. Был сағыу сарала бөтә республиканан 780 бала ҡатнаша. Программа 11 сәғәттә мәҙәниәт һарайының фойеһында башланасаҡ.

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# БӘНДӘГӘ БӘНДӘ БУЛМА

**Был әйтемдең мәғәнәһе "Кешегә кеше булма", тигән кеүек ябай ғына, бер үк ваҡытта серле кеүек тә аңлашыла. Былар барыһы ла "бәндә" төшөнсәһен "кеше" тип аңлауҙан килә торғандыр. Фарсы телендәге "бәндә" һүҙе ҡол, Аллаһ ҡоло мәғәнәһендә йөрөй. Тимәк, "Бәндәгә бәндә булма" әйтемен "Аллаһ ҡолона ҡол булма" тип аңларға кәрәктер. Икенсе төрлө итеп әйткәндә, тик Аллаһҡа ғына ҡол булыр өсөн яратылған кеше башҡа бер кемгә лә ҡол булырға тейеш түгел, йәғни тик Аллаһҡа ғына ҡол булыр өсөн яратылған кеше башҡа кешене ҡол итергә лә тейеш түгел. "Бәндә" төшөнсәһен "ҡол" итеп алып фекер йөрөткәндә әйтемдең мәғәнәһе ана ни тиклем киңәйеп, тосайып китте. Хәҙер инде донъя кимәлендәге бер миҫалға таянып, ошо әйтемдең мәғәнәһен аңларға тырышып ҡарайыҡ.**



1830 йылда французлар Урта диңгеҙ аша ҡаршы ярҙағы Алжирҙы баҫып ала һәм үҙенең колонияһына әүерелдерә. Шул мәлдән алып йөҙәр-йөҙәр меңләгән французлар, Америка ҡитғаһына ынтылған инглиздәр, португалдар кеүек, иркенерәк, яҡшыраҡ йәшәү мөхите эҙләп, Алжирға күсеп килә башлай. 1950 йылға, йәғни 120 йыл үтеүгә, колонияла йәшәүсе 9 миллион кешенең 1 миллион 200 меңен французлар тәшкил итә. Колонияла уларҙы урындағы халыҡтан айырмалы рәүештә күндән тегелгән аяҡ кейеме кейгәне өсөн "пье-нуар" ("ҡара аяҡлылар") тип атап йөрөтәләр. Шулай итеп, бер ни тиклем ваҡыттан һуң Алжирға тәүге тапҡыр килеүсе французларҙың дүртенсе-бишенсе быуыны үҙенең тыуған ере тип ошо ерҙе таный башлаған. Алжирҙа йәшәүсе французлар араһынан Францияның күп һандағы күренекле мәҙәниәт, сәнғәт әһелдәре, сәйәсмәндәр үҫеп сыҡҡан. Уларҙың араһынан киң билдәле француз фәйләсүфе һәм яҙыусыһы Альбер Камюны айырым билдәләргә мөмкин булыр ине.

Алжирҙың төп халҡы француз теле һәм мәҙәниәте йоғонтоһонан да азат була алмаған. Бер нисә йыл эсендә ғәрәптәрҙең байтаҡ өлөшө француз телендә һөйләшергә, аралашырға өйрәнгән. Һөҙөмтәлә ғәрәптәрҙең 20 проценты француз телле, әммә "ҡара аяҡлылар"ҙан айырмалы рәүештә, мосолман динле "франк-мосолман"ға әүерелгән. XX быуат башынан күп кенә Алжир ғәрәптәре төрлө хеҙмәт башҡарыу, юғары эш хаҡы эҙләү маҡсатында хәҙер инде киреге, Францияға ағыла башлай. 1970 йылға инде Францияла йәшәүсе Алжир ғәрәптәренең һаны 370 меңгә тиклем барып етә.

Тора-бара Алжир юридик яҡтан Францияның колонияһы тип аталмай, был дәүләттең өс департаменттан торған бер өлөшө булып китә. Был саҡта французларҙың барыһы ла тиерлек Алжирҙы айырым ил тип түгел, ә Франция тип атап йөрөтә. Әммә XIX быуаттың аҙағынан башлап демографик көрсөк һөҙөмтәһендә Францияның халҡы 60 йыл эсендә артмай тиерлек. Шундай шарттарҙа французларға ғәрәптәр һаман да йылдам артыусы Алжир колонияһын контролдә тотоуы ауырлаша башлай. Етмәһә, XX быуатта Франция һәм француз халҡы тормоштоң барлыҡ өлкәләрендә лә декаданс (регресс, түбәнгә төшөү - француз һүҙе) кисерә һәм Европаның боронғо тәре тотоп ерҙәр яулаусы халҡы үҙенең яугирлек рухын тулыһынса юғалта. 1954 йылда Алжирҙа ғәрәптәр ихтилалдары башланған саҡта инде французлар уларға ҡорал тотоп ҡаршы торорға, үҙ дәүләтенең берҙәмлеген һаҡларға бөтөнләй әҙер булмай сыға. Ул ваҡытта французлар Алжирҙы, Фарсы ҡултығында нефть монархтары барлыҡҡа килгәнгә тиклем, мосолман иленең иң сәскә атҡан иленә әүерелдерә. Ул йәшәү кимәле буйынса 30-сы йылдарға алдынғы Испанияны, Грецияны һәм Португалияны уҙып китә. Алжир ғәрәптәре француз хакимлығы аҫтында йәшәгән ваҡытта үҙенең эске мәҙәни автономияһын һаҡлап ҡала. Французлар Алжирҙы баҫып алған саҡта урындағы халыҡ 1 миллион ғына булһа, 1900 йылға улар - 3, 1970 йылға 8,5 миллионға барып етә.

XX быуаттың 1954-1962 йылдарындағы Алжир һуғышы тарихтың иң ҡанлыларынан иҫәпләнә. Ғәрәптәр башта уҡ французларға "Табут йәки сумаҙан!" тигән ультиматум ҡуя. Һуғыштың тәүге көндәрендә үк алжирҙар Бон ҡалаһында француз балалары теләгән автобуска ут аса. 1955 йылдың башында ғәрәптәр Филиппвиля (хәҙер - Скикда) янындағы шахтерҙар йәшәгән ҡасабалағы французларҙың барыһын да һуйып сыға.

Алжирҙар ихтилалы Францияны ике өлөшкә бүлә. Ғәрәп ҡаны ҡатнашҡан француз баш күтәреүселәрҙе яҡлай, Алжир һуғышын Францияла социалистик революция башланыуы тип ҡабул итеүселәр Франция дәүләте һағына баҫа. Һуғышта ғәрәптәр еңелә, әммә 1958 йылда власҡа килеүсе генерал де Голль: "Ғәрәптәрҙә тыуым көслө. Был хәл Алжир французлыҡы булған кеүек, Францияны алжирҙыҡына әйләндерәсәк",- тип, Алжир халҡына үҙаллылыҡ бирергә кәрәк, тип ҡарар итә. 1961 йылдың башында Эвиан курорт ҡалаһында Француз Республикаһы Хөкүмәте менән Алжир Милли Азатлыҡ Фронты - FLN вәкилдәре араһында рәсми һөйләшеүҙәр башлана. Һөйләшеүҙәрҙә һүҙ күберәк Франция гражданлығында булыусы ғәрәптәр, франко-мосолмандар хаҡында бара.

FLN делегацияһы Алжирҙа йәшәүсе французларҙың бер ниндәй ҙә хоҡуғын танымай, уның ҡарауы, Францияла йәшәүсе ғәрәптәрҙең айырым статусын даулай. Алжирҙар был дәүләттә йәшәүсе ғәрәптәрҙең Франция гражданлығынан тыш, уларҙы мосолман суды, шәриғәт ҡануны буйынса яуапҡа тарттырыу шартын ҡуя. Шулай уҡ Францияла йәшәүсе Алжир балалары ошо дәүләттең мәғариф министрлығына ҡараған ғәрәп милли мәктәптәрендә уҡырға, һәр бер Алжир кешеһе француз властары хакимлығы аҫтында йәшәгән саҡта кисергән ыҙалары өсөн махсус компенсация алырға тейешлеге FLN Франция Республикаһы Хөкүмәте алдына ҡуйған талаптарҙың мөһим өлөшөн тәшкил итә.

Франция властары ғәрәптәрҙең бындай ҡаты талаптарын үтәргә әҙер булмай һәм һөйләшеүҙәр өҙөлөп ҡала. Быға яуап итеп ғәрәптәр Парижда француз полицияһына ҡаршы бер нисә терακт ойоштора. Ҡаршы тороуҙарҙың иң юғары нөктәһе 1961 йылдың 5 октябрендә була. Ул көндө Францияла йәшәүсе алжирҙар өсөн комендант сәғәте иғлан ителә. Уларға ҡаршы 17 октябрҙә 40 мендән ашыу алжир кешеһе, күбеһе ҡулына ҡорал алып, Париж урамына сыға. Уларҙың ҡулында "Франция - ул Алжир", "Франктарҙы туҡма!", "Эйфель башняһы манара буласаҡ", "Гүзәл Франция, ҡасан тонсоғорһоң икән?", "Париж һөйәркәләре - ҡайҙа һеҙҙең хиджабығыҙ?" тигән лозунгтар яҙылған плакаттар була. Һөҙөмтәлә француз полицияһы менән баш күтәреүселәр араһында ике сәғәтлек ҡанлы драма уйнала. Күп кенә ғәрәптәр Сена йылғаһына батып үлә, байтағын полиция туҡмап үлтерә. Рәсми булмаған сығанаҡтар буйынса, был көндө бер нисә йөҙ кеше һәләк була.

1962 йылдың июлендә Алжир бойондороҡһоҙлоғо көнөндә ғәрәптәр күпселектә европалылыр йәшәгән Оран ҡалаһын баҫып алып, унда ҡан ҡойош ойоштора. Тап ошо ваҡиғанан һуң француз Алжиры эпохаһы тамамлана.

Шулай итеп Алжир мосолмандары французларға үҙҙәрен ҡоллоҡҡа төшөрөргә тырышҡаны, раса дискриминацияһы өсөн ғәйеп комплексын тағыуға өлгәшә. Улар иң тәүҙә Францияла күп ҡатынлыҡты законлаштырыуға һәм, ҡыйырһытылыусы әҙселекте тәшкил итеүселәр булараҡ, үҙҙәренә айырым хоҡуҡ яулауға өлгәшә. Артабан мосолмандар француз мәғарифының светский характерын инҡар итеүгә һәм үҙҙәренсә мәғариф системаһы булдырыуға өлгәшә. Ҡасандыр француз Алжиры юҡҡа сыҡҡан һымаҡ, Франция үҙе лә донъя картаһынан юғалыу алдында. Бәндәгә бәндә булырға тырышыу бына нимәгә алып килә.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар.)**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Мәскәүҙә йыл һайын уҙғарыла торған "Алтын гонг - 2013" профессиональ журналистар конкурсы еңеүселәрен бүләкләү тантанаһы үтте. "Йыл мөхәррире" номинацияһында "Уфа" журналы һәм "Уфимские ведомости" гәзите етәксеһе Галина Ишмөхәмәтова еңеүсе тип танылды. "Алтын гонг - 2013" конкурсы ойоштороусыһы - Рәсәй төбәк киң мәғлүмәт саралары етәкселәре альянсы.

✓ Яҡынлашып килгән яңы йыл байрамдары алдынан Рәсәй Федераль Суд приставтары хеҙмәтенең Башҡортостан буйынса Идаралығы суд приставтары алимент, һалым, штраф, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәте һәм башҡа төр социаль йөкләмәләрҙе түләтеү буйынса рейдтар үткәрергә ниәтләнә. Бурыстары булған граждандар закон вәкилдәренең уларҙың милкенә арест һалыу, эш хаҡын алыу, бурыслыларҙы административ һәм енәйәт яуаплылығына тарттырыу кеүек саралар күрәсәгенә әҙер булырға тейеш.

✓ БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығында Өфө уҡыусылары өсөн ойошторолған "Ҡағыҙ бум"ы экологик акцияһы еңеүселәрен бүләкләнеләр."Ҡағыҙ бум"ы экологик акцияһы сиктәрендә балалар бөтәһе 240 тонналап макулатура йыйҙы. Бында Киров районы уҡыусылары иң ҙур әүҙемлек күрһәтте, улар 56 тонна самаһы макулатура йыйҙы. Экологик акцияны Өфө хакимите ярҙамында "Таҙа ҡала" компаниялар төркөмөнөң "БР Экологияһы" яуаплылығы сиклөнгән йәмғиәте ойоштorҙо.

✓ Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында күренекле сәсән Мөхәмәтша Буранғоловтың 125 йыллығына арналған сара үтте. Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ойошторған сарала фундаменталь һәм ҡулланма ғилми хеҙмәттәр, "Фән - халыҡҡа" академик баҫмалары презентацияланды. "Төрксой" Халыҡ-ара ойошмаһында БР Мәҙәниәт министрлығы вәкиле Әхәт Сәлихов төрки халыҡтарҙың халыҡ-ара мәҙәниәтенә ҙур өлөш индергәне өсөн филология фәндәре докторы, профессор Фирҙәүес Хисаметдинованың "Төрксой"ҙың иҫтәлекле миҙалын тапшырҙы.

**"Башинформ"дан.**

АФАРИН!

**Прогресс этәргесе булып ялҡаулыҡ торһа (тап шул арҡала кер-һауыт-һаба йыуыу машиналары, саң һурҙырғыстар, сәс алыу ҡоралмалдары һ.б. уйлап табылған, тиҙәр), эшһеҙлек тип нарыҡлаған замандың яҡшы яғы булып кәсепселек, борон атай-олатайҙар башҡарған һөнәрҙәр, һөнәрселек үҫеш алды. Әлбиттә, "белмәйем"дең генә башы ауыртмай, әммә ҡулы оҫталар, күңелдәрендә дәрт-дарман ятыусылар тәүҙә күңел өсөн генә тип, һуңынан туған-тыумасаһына бүләккә тип, ҡул белгән һөнәрен көнләп, айлап, йыллап үҫтерә, шымарта бара. Һуңынан инде был шөғөл күңел талабына ғына әүерелеп ҡалмай, ә килем сығанағына ла әйләнә. Бары тик "белмәйем" тигән диагноздан ҡотолорға ғына кәрәк. Моғайын, иң ауыры шулдыр.**

# ҺӨНӘРЛЕЛӘР...

## күрһәтте үҙ һөнәрен



Быйыл "Башҡортостан" гәзите редакцияһы "Мираҫ" хәйриә фонды һәм Республика халыҡ ижады үҙәге менән берлектә республикала беренсе тапҡыр "Һөнәрмән" конкурсын үткәрҙе һәм был сара, ниһайәт, тотош донъя алыпһатарлыҡ, селтәрле маркетинг сауҙаһы менән тулған ваҡытта, ҡараңғы батшалыҡҡа яҡты бер нур булып килеп инде. Ысынлап та, республикабыҙҙа күпме халыҡ һәм милләт вәкиле йәшәһә, уның һөнәрмәндәре, ҡул эшенә маһир оҫталары ла шундай уҡ география һәм ассортимент менән баһалана. Конкурстың йомғаҡлау тантанаһына килгән һөнәрмәндәрҙең эше быға асыҡ миҫал булып торҙо.

Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ районындағы Ерекле ауылынан килгән Люция Тойғонованың мамыҡ шәлдәре, Мәсетле районынан килгән Иштуған Фәүнетдиновтың йомшаҡ баймалары... Хатта үҙең дә һиҙмәҫтән, хыял донъяһына сумаһың: хәләлендә мамыҡ шәлгә урап, аяҡтарыңа йомшаҡ баймалар кейеп, Учалы оҫтаһы Сәғит Фәхретдиновтың йүгән-сбруйҙары менән пар аттар егеп, Ҡыш бабай һәм Ҡарһылыу роленә инеп, ошондағы сувенирҙарҙы, ҡул эштәрен һәр кемгә Яңы йыл бүләге итеп таратып сыҡ ине әле! Әнүәр Игебаевтың ағас шарҙары, Ҡырмыҫҡалы районынан Әхәт Нурушевтың йоморҡа ҡабығынан эшләнгән сувенирҙарын, Көйөргәҙе районынан Юлай Хәлитовтың ағастан семәрләп-һырлап эшләгән әйберҙәрен, Мәсетле районынан Илгизә Лоҡмановаҙың туҙҙан эшләнгән һауыт-һабаһын бүләккә алған кешеләр, һис шикһеҙ, ихлас ҡыуаныр ине, билләһи!

"Һөнәрмән" конкурсында ҡатнашыусыларҙың барыһы ла тиерлек ниндәйҙер номинацияла еңеүсе булды. Мәҫәлән, "Иң яҡшы ағас эше" номинацияһында ғына ла ете кеше еңеүсе булды, улар: Әбйәлил районының Хәмит ауылынан Рәфҡәт Һаҙыев, Бөрйән районының Байназар ауылынан Рафаэль Иманғолов, Сибай ҡалаһынан Әнүәр Игебаев, Якут (Саха) Республикаһынан Әхмәт Фәйнетдинов, Асҡын районының Яңы Ҡарткиҫәк ауылынан Фәриҙә һәм Фәйнетдин Хөснөтдиновтар, Көйөргәҙе районынан Юлай Хәлитов, Бөрйән районы Яңы Собханғол ауылынан Фазыл Кинйәбаев.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Шағир әйтмешләй, был көндө һөнәрлеләр фойела ла, сәхнәлә лә үҙ һөнәрен күрһәтте. Һаман да үҙ көсөнә, үҙ һәләтенә ышанып етмәүселәрҙең күңеленә дәрт-дарман өҫтәне. Республикабыҙҙа һөнәрселек һәм кәсепселектең борон-борондан килеүен һәм уның үҙ милли йөҙө, һыҙаттары, хатта ул ғына ла түгел, меңәр йылдар формалашҡан үҙ традицияһы ла булыуын тағы бер тапҡыр раҫланы. Ә беҙ бөгөн файҙаланған, ҡулланған һәр нәмә - ҡасандыр онотолған иҫке нәмәләрҙең заманса сағылышы ғына ул...**

Земфира ХӘБИРОВА.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ОЛИМПИЯ УТЫ...

## Өфөләләргә бер тамаша булды



**Олимпия уты Волга буйы федераль округына ла килеп етте һәм 2014 йылда Сочиҙа үтәсәк Олимпиаданың төп символы Башҡортостандың баш ҡалаһында ике көн буйына сәйәхәт итте.**

Өфөлә эстафета дөйөм оҙонлоғо 87 километрға һуҙылған 401 этаптан торҙо. Факелды беренсе булып 2004 йылдағы Олимпиадала фехтование буйынса бронза миҙал яулаусы Руслан Насибуллин ҡабул итте. Беренсе көндә ут ҡаланың тарихи өлөшөндә булып, "Аҡбуҙат" ипподромында эстафета туҡтап торҙо. Бында спортсыларҙы 800 Ҡыш бабайҙан торған парад ҡаршы алды.

Ипподромға ат кортежы оҙатыуында факелды юниорҙар араһында биш тәр ярыш буйынса Европа чемпионы Гөлназ Ғөбәйҙуллина алып инде. "Биш төр ярыштар ваҡытында аттарҙы йәрәбә тартҡандан һуң бирәләр һәм уларҙың холҡон өйрәнеү өсөн ваҡыт та, мөмкинлек тә булмай. Бындай тәжрибә һәр ат менән дә эшләй алырға булышлыҡ итә һәм был миңә эстафетаның был этабына репетициялар үткәргәндә ныҡ ярҙам итте", - ти чемпионка.

Башҡортостандың Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министры Андрей Иванюта әйтеүенсә, "был эстафета Рәсәй халҡына Башҡортостандың уңыштарын күрһәтеп, алдыңғы шәхестәр тураһында һөйләргә мөмкинлек бирәсәк. Өфөлә һәм республикала йәшәүсе һәр кем үҙенең Олимпиадаға мөнәсәбәте булғанын тояСаҡ".

Бөгөнгө көн программаһына ярашлы, Олимпиада уты ҡаланың сәнәғәт ойошмалары урынлашҡан урамдарҙан, һуңынан Енеү паркы буйлап үтеп, Рус драма театры, Башҡорт дәүләт медицина университетының волонтерҙар үҙәге эргәһендә буласаҡ. Үҙенсәлекле был сәйәхәт "Өфө-Арена" спорт комплексы эргәһендә тамамлана. 2006 йылда Туринда үткән Олимпиадала бобслей буйынса көмөш миҙал яулаусы Алексей Селиверстов менән республика етәксеһе Рөстәм Хәмитов ҡаланың Олимпиада утын тоҡандырасаҡ.

Өфө "Олимпиада - 2014" утын ҡабул иткән 89-сы ҡала. Олимпиада Сочиҙа 7 февралдә башлана.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ИКЕ ТАПҠЫР ХОҠУҠЛЫ

**Атай-әсәйем менән йәшәгән (балиғ булмаған) саҡта фатирыбыҙҙы бергәләп хосусилаштырыуҙа ҡатнашҡайным, уны беҙ һаттыҡ. Күптән бирле иремдең фатирында йәшәйем һәм шунда теркәлгәнмен. Хәҙер мин ошо фатирҙы хосусилаштырыуҙа (икенсе тапҡыр) ҡатнаша аламмы?**

Эйе, һеҙ икенсе тапҡыр хосусилаштырыуҙа ҡатнаша алаһығыҙ. Әлбиттә, дөйөм ҡағиҙә буйынса, һәр кем торлаҡ хосусилаштырыу хоҡуғына бер тапҡыр ғына эйә, ләкин һеҙ тәүге тапҡыр был ғәмәлдә балиғ булмаған саҡта ҡатнашҡанһығыҙ. Был осраҡта балалар балиғ йәшенән үткәс, икенсе торлаҡты тағы бер тапҡыр түләүһеҙ хосусилаштырыу хоҡуғын һаҡлап ҡала ("РФ Торлаҡ фондын хосусилаштырыу тураһында" РФ Законының 11-се статьяһы).

## ШТРАФ ТҮЛӘГӘС, ТУҠТАРҘАР

**Бушлай косметология хеҙмәттәре вәғәҙә итеп, ниндәйҙер компаниянан шылтыратып йонсоталар. Яҡшылап әйтеп тә, әрләшеп тә ҡараным, файҙаһыҙ - көн дә шылтыраталар. Миңә ни эшләргә?**

Күрәһең, телефон номерығыҙ ниндәйҙер базаға барып эләккән. Һеҙҙең бурыс - шунан сығыу. Килеһе шылтыратыуҙарында һөйләшеүҙе хоҡуҡ һаҡлау органдарына тапшырыу өсөн яҙҙырыуығыҙ хаҡында әйтегеҙ. Был файҙаһыҙ булып сыҡһа, ысынлап та, килеһе тапҡыр уны яҙҙырырға тура килер. Тик был турала өндәшмәгеҙ, киреһенсә, шылтыратыусы оператор менән һөйләшеүҙе оҙаҡҡараҡ һуҙып, ниндәй төр тауарҙар тәҡдим итеүҙәре, уларҙың сифаты, компанияның адресы, телефоны һ.б. тураһында мөмкин тиклем тулыраҡ мәғлүмәт алырға тырышығыҙ. Һөйләшеүҙең аҙағында башҡа шылтыратмауҙарын үтенеп, телефон номерығыҙҙы ҡайҙан алыуҙарын һорағыҙ. Аҙаҡ һөйләшеү тексын дискыға яҙҙырып, персональ мәғлүмәттәрегеҙҙең законһыҙ файҙаланылыуы тураһында "Роскомнадзор" төбәк идаралығына ғариза менән әлеге телефон яҙмаһын да ҡушып һалып ебәрегеҙ. Был структура граждандарҙың персональ мәғлүмәттәрен һаҡлау һәм контролдә тотоу эше менән шөғөлләнә, һәм ул хеҙмәттәрен көсләп тағыусы фирмаға ҡарата тейешле сара күрергә (штраф һалыу, мәҫәлән) бурыслы.

## АЛИМЕНТ - БАЛА ӨСӨН

**Улым алимент түләй, ә элекке ҡатыны аҡсаны баланың ихтыяждарына түгел, һөйәрҙәре менән типтереүгә тотона. Улымдың икенсе никахтан тағы бер балаһы бар. Ошоға бәйле, ул тәүге балаға алимент күләмен кәметеүҙе һорай аламы?**

Алимент аҡсаһы фәҡәт бала тәрбиәләүгә тотонолорға тейеш. Әгәр элекке ҡатынының алимент аҡсаһын тәғәйенләнеше буйынса файҙаланмауы (балаға тәрбиә юҡ, уның тамағы ас, кейеме иҫке һ.б.) хаҡында улығыҙҙың иҫбатлай алырлыҡ фактары булһа, уға баланы үҙ ҡарамағына алыу хаҡында уйларға нигеҙ бар. Ә инде ул баланы үҙенә алырға теләмәһә, ул алимент күләмен 1/6 өлөшкә тиклем кәметеү тураһында юллау ғаризаһы менән бер үк ваҡытта алиментты 50 процентын бала исеменә асылған банк иҫәбенә күсереүҙе лә юллай ала. Алиментты ҡалған өлөшөн ул барыбер баланың әсәһенә түләргә тейеш була. Аныҡ фактары булған хәлдә ул элекке ҡатынының тәртибе хаҡында шулай уҡ баланың йәшәгән урыны буйынса опека һәм попечителлек органына алиментты тәғәйенләнеше буйынса файҙаланылмауы хаҡында ла яҙып ебәрә ала. Опека органдары баланың тәрбиә һәм йәшәү шарттарын урынға барып тикшерергә бурыслы (РФ Ғаилә кодексы, 60, 80-83-сө статьялар).

Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләнө.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ҡан баҫымы юғары булғанда

❖ Сөгөлдөр һутын шул уҡ күләмдәге бал менән ҡушып, көнөнә 3-4 мәртәбә яртышар стакан эсергә. 3 ай буйы дауам итегеҙ.

### Склероз

❖ Оло кешелә склероз булмаһын өсөн көн һайын ас ҡарынға 1 сей картуф ашау файҙалы.

❖ Баш ауыртҡанда сей картуф киҫәктәрен маңлайға ҡуйырға.

❖ Баш һәр саҡ ауыртһа, яңы ғына һығылған картуф һутын көнөнә 3 мәртәбә ашарҙан ярты сәғәт алда стакандың дүрттән бер өлөшө күләмендә эсергә.

### Лимонлы массаж

Киҙеү мәлендә, һыуыҡ тейгәндә лимондың һутын һығып алырға һәм ҡабығы менән табанды ныҡ итеп ышҡырға. Лимон тәме ауыҙҙа ла беленер, ҡанға ла таралыр, йүнәлергә лә ярҙам итер.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

### Йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы ауырыуҙары

25 гр ҡәнәфер, ҡырғыстан үткәрелгән 3 эре лимон, 0,5 гр шәкәр, 0,5 л "Экстра" араҡыһы. Быларҙың барыһын да 3 литрлыҡ банкаға һалып, ҡайнар һыу ҡойорға (45-50 градус эҫелектәге) һәм 14 көнгә ҡараңғы урынға ҡуйырға. Дауаланыу курсы өсөн 3 өс литрлы банкалағы төнәтмә кәрәк буласаҡ. Көнөнә 3 тапҡыр ашар алдынан 15 минут алда 25-әр грамлап эсергә. Баш ауыртыуы бөтә, ҡан баҫымы нормаға килә, йөрәк ауырыуҙарының ҡайһы берҙәре юҡҡа сыға.

### Дисбактериоз

0,5 л йылытылған һыуға 1 ҡалаҡ бал һәм шәкәр, 2 грамм сүпрә өҫтәп, сәғәт ярым йылы урында тоторға. Ашар алдынан 3-4 сәғәт алдан ошо дауаны тоторға. Әгәр ҙә беренсе тапҡырҙан ярҙам итмәһә, 2-3 көндән тағы ҡабатларға.

Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.

БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ

## БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

**Бүтәгәнән сыҡҡан таш.** Берәй ер бәрелеп, күгәрһә, бүтәгәнән сыҡҡан ташты баҫып имләгәндәр:

*Минең ҡулым түгел, Гәйшә, Фатима ҡулы,*
*Име-томо шул булһын, Тфү, тфү, тфү!*

**Аяҡ-ҡул һыҙлағанда ергә һалыу.**

1. Аяҡ-ҡул һыҙлағанда, ергә һалалар. Уны шулай атҡарғандар: һыуға тырнаҡ, сәс, йомортҡа ҡабығы һалалар.

*Бисмилләһи, ерҙән күккә,*
*Бисмилләһи, күктән ергә,*
*Бисмилләһи, ғәрештән күккә!*

- тип, ҡара доға уҡый-уҡый, һыу һалынған һауытты өс мәртәбә ауырыу тирәләй уратып алалар ҙа, юл сатына түгәләр. Шулай итһәң, ауырыу ергә китә була.

2. "Ҡара төн уртаһында, кеше аяғы һил булып, ерҙәге бар тереклек тәрән йоҡоға киткәс, шылт иткән тауыш та юҡ саҡта, кәзә баҡырыуы ла, эт өрөүе лә ишетелмәгән мәлдә имсе тауыштың сей йомортҡаһын ала. Унда тәүҙә еп һыйырлыҡ ҡына тишек тишә. Ауырыуҙың кейеменән ҡыҙыл еп ала ла, шуны, бер тинлеҡ аҡсаны, тутыҡҡан тимер ҡаҙаҡты һәм ҡош тырнағын әлеге тишеккә төшөрә. Шул йомортҡаны ауырыу тирәләй йөрөтә-йөрөтә:

*Әпсен-әпсен, бында торма, кит, һин!*
*Кем ебәргән, шуға кит!*
*Ауыр сирҙе алып кит!* -тип һамаҡлай. Шунан ул йомортҡаны ауырыуҙың берәй ҡулдәгенә урап, йә соҡорға, йә күлгә, йә сүплеккә, йә ағын һыуға ырғыта.

3.Кешенең аяҡтары һыҙлағанда, сей бәрәңгене урталай ярып, ауыртҡан урынды ышҡырға кәрәк. Ышҡығанда шулай тип әйтемләйһең:

*Һыу инәһе Һарысәс,*
*Ер инәһе Ерәнсәс!*
*Минең ҡулым түгел,*
*Гәйшә, Фатима ҡулы.*
*Мине тотма,*
*Ошоно тот!*
*Шунан бәрәңгене ергә күмәһең.*

### Өҙләк имләү

Өҙләк һүҙенең диалекттарҙа өҙҙөк, өҫтөк, өҫтек варианттары бар. Башҡорт телендә был һүҙ өҙләк булыу, өҙҙөк тотоу, өҫтөк булыу, өҙләк төйөү, өҙләк имләү кеүек һүҙбәйләнештәрҙә осрай. Ҡоншаҡ башҡорттары телендә өҫтөк-өҙәнөк тигән парлы һүҙ составында ҡулланыла.

Ышаныуҙар буйынса, Өҙләк - ул ауырыу эйәһе. Гәҙәттә, ул балана һуң һырҡ көнгә тиклем һаҡланмаған ҡатын-ҡыҙҙы тота. Хәйбулла районынан Зөһрә Аҡбалина өҙләк тураһында түбәндәгеләрҙе һөйләне: "Кырҡ көнгә тиклем йәш балалы ҡатын-ҡыҙ сабый хөкөмөндә була, тиҙәр ине ололар. Уны шуға яңғыҙ өйҙә ҡалдырырға, кәртә-ҡураға, урамға, баҙарға сығарырға ярамай. Ир менән бергә йоҡлау, мунсаға йөрөү ҙә язык һаналған. Кеше алдында бала имеҙергә, кейемдәрҙе ялпылдатып, яланбаш йөрөргә лә ярамай, тиҙәр. Ошо тыйыуҙарҙы үтәмәгән ҡатын-ҡыҙға өҙләк була икән. Минең үҙемә өҙләк булды. Күкрәктәр шеште. Температура күтәрелде. Тәүҙә өҙләк икәнен белмәнек. Аҙаҡ сәнсеп һыҙлай башлағас ҡына белдек. Ҡәйнәм Сафура тиған инәйҙе алдыртты. Ул итәгемә өс ерҙән көл төйнәп бәйләне, өшкөрҙө, банка ҡуйҙы. Шунан ғына бөттө теге өҙләк. Ул биҡ яман нәстә икән".

Өҙләк булғанда ҡайһы бер ҡатын аяҡһыҙ ҡала, бәгәләре енләнеп, алмашынып ауырый. Өҙләктән аяҡһыҙ ҡалыу тураһында түбәндәге материал һөйләй: "Икенсе баламдан һуң мине өҙҙөк тотто. Бушанғандан һуң оҙаҡ ятманым. Көн йылы ине. Торғас, һыуға барҙым, малдарҙы ҡараным, мунса яҡтым. Шунан китте аяҡ һыҙҙап. Бөтөндәй аттай алмай баштаным. Ирем ҡәйнәмде алып килде. Ул ҡорот иҙеп эсерҙе, мунсаға алып барҙы. Оҙаҡ тотҡан, тип туғыҙ ерҙән итәгемә көл төйҙө. Өс-дүрт көндән аяғымдың шеше ҡайтты", - тип һөйләне Белорет районынан Ғ. Хисаметдинова.

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

# ЙӘШТӘРЕБЕҘ АҢЫНДА...

## илһөйәрлек булһын, тип

**Стәрлетамаҡ ҡалаһында Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты Советының күсмә ултырышы булып үтте. Сара Рәсәй Федерацияһы һәм Башҡортостан Республикаһы Конституцияларының 20 йыллығына арналды һәм "Хәҙерге шарттарҙа йәштәрҙе илһөйәрлек рухында тәрбиәләү һәм гражданлыҡ йәмғиәтен төҙөү" тип аталды. Күсмә ултырышта Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары - Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Румил Аҙнабаев, уның беренсе урынбаҫары Хәләф Ишморатов, РФ Дәүләт Думаһы депутаты Сәлиә Мырҙабаева, БР Конституцион суды рәйесе Люциә Ғүмәрова, БР Президенты хакимиәтенең ижтимағи-сәйәси үҫеш идаралығы начальнигы урынбаҫары Ришат Сабитов, БДУ проректоры Юлай Янбаев, БДУ-ның Стәрлетамаҡ филиалы директоры Йәғәфәр Әбдрәшитов һәм башҡалар ҡатнашты. Шулай уҡ ултырышҡа республиканың көньяҡ, көньяҡ-көнбайыш төбәгендәге 16 районан башҡорт ҡоролтайҙары вәкилдәре саҡырылғайны.**



Йәш быуынды тәрбиәләү мәсьәләһе төп иғтибар үҙәгендә булыуы юҡҡа түгел. Бөгөн бар донъяла йәш андар өсөн көслө алыш бара. Айырым көстәр киң мәғлүмәт саралары, интернет, кинофильмдар аша йәш быуын вәкилдәренә Көнбайыш ҡиммәттәрен күндерергә тырыша. Наркоманлыҡ, алкоголизм, компьютеромания кеүек заман "сырҙәре" менән менән бергә битараф быуын үҫеү ҡурҡынысы арта. Ошондай шарттарҙа йәштәрҙе илһөйәрлек рухында тәрбиәләү дәүләттен, милләттең төп бурыстарының береһе булып тора. Хәләф Хәлфетдин улы үҙ докладында ошо һәм милләтебеҙгә ҡағылышлы башҡа мөһим мәсьәләләргә туҡталып китте. Илһөйәрлек тәрбиәләүҙең бер ысулы туған телде белеү икәнен дә билдәләп, йәштәрҙең ошо юҫыҡтағы битарафлығына борсолоуын белдереп, докладсы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларына: "Балаларҙың тыуған телен ихтирам итеүе, уны ғорурланып ҡулланыуы туранан-тура һеҙгә бәйле. Зинһар, һеҙ башҡорт теленең йәмен, тәмен, матурлығын, нәфислеген, байлығын оҫта итеп күрһәтеп, телен һөйөүсе, илен һөйөүселәрҙе тәрбиәләгеҙ. Әлбиттә, был маҡсатҡа өлгәшеү ҡыйын. Ләкин был бурыс кисектергеһеҙ үтәлергә тейеш. Мөмкин тиклем был эште бергәләп башҡарайыҡ, ә һеҙ ойошторосы булығыҙ", - тип мөрәжәғәт итте.

Пленар ултырыштан һуң дауам иткән секциялар эшендә милли дәүләтселек сәйәсәте үҙенсәлектәре, йәш быуынды илһөйәрлек рухында тәрбиәләүҙә башҡорт теле һәм әҙәбиәтенен, мәҙәниәт, сәнғәт һәм диндең, ғаилә, белем биреү учреждениелары һәм киң мәғлүмәт сараларының роле, эшҡыуарлыҡ һәм экология мәьәләләре ҡаралды. Секцияларҙағы фекер алышыуҙарҙы Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты Советы ағзалары Х. Ишморатов, Н. Ҡалмантаев, Ф. Хисаметдинова, Г. Янбаева, И. Аҫылғужин, А. Ҡотләхмәтовтар ойоштorҙо.

Күсмә ултырыш эшендә БДУның Стәрлетамаҡ филиалы етәкселәре, уҡытыусылары һәм студенттары бик әүҙем ҡатнашыуын да билдәләп үтергә кәрәк. Улар Ҡоролтайҙың мәғариф усағы менән берҙәм бурыс атҡарыуын аңлап, ҡала һәм республика етәкселәренең Стәрлетамаҡтың башҡорт донъяһындағы ҡайһы бер проблемаларға иғтибарын йәлеп иттереүгә өмөтләнеп тотонған сараны ойоштороу эшенә. Ысынында, проблемалар етерлек. Мәҫәлән, оптималләштереү ауыл мәктәптәренә генә түгел, ҡаланың дөйөм урта белем биреү усаҡтарына ла ҡурҡыныс менән янай. Һуңғы ваҡытта Стәрлетамаҡтағы ике башҡорт мәктәбен бергә ҡушыу хаҡында һүҙҙәр йыш ишетелә. Ә республиканың иң алдынғы ижад коллективтары - Стәрлетамаҡ башҡорт драма театры менән Стәрлетамаҡ дәүләт филармонияһы бергә ҡушылып, Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе исеме алды ла инде. Шулай итеп, һуңғы йылдарҙа матур ғына ижади үҙәккә әүерелгән, талантлы кадрҙар үҫтергән Стәрлетамаҡтың сәнғәт донъяһында ла оптималләштереүҙән, ҡыҫҡартыуҙарҙан күңел төшөнкөлөгө барлыҡҡа килде. Эшһеҙ ҡалғандар республиканың төрлө төбәктәренә таралырға, Өфөгә юлланырға мәжбүр. Шулай инде, мең төрлө ҡыйынлыҡтар менән төҙөгәнде, ойоштorғанды емереүе, тарҡатыуы һәр саҡ еңел. Тағы... Республикалағы иң өлкән юғары уҡыу йорттарының береһе иҫәпләнгән Стәрлетамаҡ педагогия институтының хәҙер килеп БДУ-ның филиалы итеп үҙгәртелеүе лә, үҙгәртелгәндән һуң унан халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишева исеме алып ташланыуы ла күп һорауҙар тыуҙыра. Статус үҙгәрҙе, әммә проблемалар ҡалды була инде. Был йәһәттән БДУ-ның Стәрлетамаҡ филиалы директорының дөйөм мәсьәләләр буйынса советнигы Марс Хәмиҙуллиндың әйткәндәре менән килешмәй мөмкин түгел:

- Стәрлетамаҡ педагогия академияһын БДУ-ға ҡушҡандан һуң беҙ үҫеш өсөн ниндәйҙер яңы йүнәлеш күрһәтеләр, һәҙәмтәлерәк эштәр өсөн план тәҡдим ителәр, тип көттөк. Әммә быға яуап итеп "Юл картаһы" ғына алдыҡ. Нимәнән ғибәрәт һуң "Юл картаһы"?

Ул 2013-2018 йылдар өсөн саралар планы. Уның буйынса 2018 йылда студенттар һанын 22 процентҡа кәметеү планлаштырыла. "Юл картаһы" эшләй башлаһа, БДУ һәм уның филиалдарындағы уҡытыусылар һаны 40 процентҡа, кафедралар 96-нан 65-кә тиклем ҡыҫҡартыласаҡ. 2018 йыл тиҙ килеп етер ул. Был тиклем ҡыҫҡартыуҙарҙан һуң Башҡорт дәүләт университеты киләсәктә бюджет урындары булмаған коммерция уҡыу йортона әйләнмәҫме? Бөгөнгө көндә федераль һәм милли-тикшеренеү университеттары иҫәбенә инеүсе вуздарға иң яҡшы уҡыу йорттары иҫәбенә инеү маҡсаты ҡуйылған. Тимәк, маҡсатты тормошҡа ашырыу өсөн төп сығымдар уларға йүнәлтеләсәк. Беҙҙең уҡыу йортонон ундай статусы юҡ. Шуға ла киләһе йылдар бик уҡ өмөтлө күренмәй әле. Ошондай күп йыллыҡ тарихы булған уҡыу йорттарын яҡлап, халыҡ, йәмғәтселек тә үҙ һүҙен әйтергә тейештер. Ярҙам өмөт итеп, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетына мөрәжәғәт итәбеҙ инде...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Халыҡты бер аҙ һелкетеп алыр, әүҙем хәрәкәткә йәлеп итер сара булды ҡоролтайҙың был ултырышы ла. Район, ҡалаларҙағы башҡорт ҡоролтайҙары эшенә йүнәлеш билдәләнде, яңы бурыстар ҡуйылды. Төп законыбыҙ булған Конституцияны, унда билдәләнгән хоҡуҡтарҙы яҡшы белеү үҙенде, ерендә һаҡлауҙың һөҙөмтәле ҡоралы булып тороуы тураһында ла ҡабат-ҡабат иҫкә төшөрөлдө. Йәштәрҙе илһөйәрлек рухында тәрбиәләү, халыҡтың үҙаңын күтәреү юлдары хаҡында күп яҡшы фекерҙәр, тәҡдимдәр яңғыраны. Сығыштарҙа яңғыраған был ҡиммәтле фекертәҡдимдәр сара үткән Стәрлетамаҡ филиалының тамаша залы менән генә сикләнмәйенсә, башҡалар иғтибарына ла еткерелер, киләсәктә үтәлешен табыр, яҡшы миҫалдар башҡаларға өлгө булыр, тип ышанырға ҡала.**

**Азамат САЛАУАТОВ.**

✓ *Икенсе эш - Вәлидиҙең бөтә китаптарын, мәҡәләләрен башҡортсаға тәржемә итеп, 10 томдан да артығыраҡ торор академик баҫмаһын сығарыу. Был йыйынтыҡ өсөн бик күп төплө, нигеҙле аңлатмалар әҙерләргә кәрәк буласаҡ.*



*ВӘЛИДИ ХАҠЫНДА ҺҮҘ*



**Әхмәтзәки Вәлиди тураһындағы иҫтәлектәрҙе тыуған илгә ҡайтарыу өсөн күп көс һалған шәхесебеҙ, философия фәндәре кандидаты Әмир ЮЛДАШБАЕВ менән алып барылған әңгәмәләребеҙҙе дауам итәбеҙ.**

# АҠТАМЫРҘАЙ ХАЛҠЫБЫҘ...

## Бишенсе һүҙ: "Ҡуян ҡыуып барышлай, етди мәсьәләгә асыҡлыҡ индереп булмай..."

**Һорау: "Коммунист Башкортостана" гәзитенең һуңғы һандарының береһендә (2013, №10, октябрь) журналист Мадриль Ғафуров "махровый милләтселәрҙән" үҙен яклап яҙған ҙур мәҡәләһенең аҙағында бер исемлек килтерә. Ул, йәнәһе, Эйзенхауерҙың яръямсыһы генерал Донованлың материалдары араһында табылған һәм унда иң ҡурҡыныс фашистарҙың һәм хәрби енәйәтселәрҙең исемлеге килтерелгән. Профессор медик, Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайы депутаты Р. Ә. Хәсәнов быйыл сыҡҡан "Һунарсы көндәлеге" исемле китабында ла Зәки Вәлиди хаҡында шундай уҡ нигеҙһеҙ раҫлауҙарҙы ҡабатлағандан һуң, уны фашистарҙың икмәген ашаған һатлыҡ йән итеп тасуирлаған. Нисек аңлатырһығыҙ?**

- Марсель Ғафуров яҙған мәҡәләнән 1937 йыл еҫтәре сыға. Аҙағында килтерелгән сәйер исемлек бер ни ҙә иҫбат итмәй. Ундағы төрөк пашалары араһына Ә.Вәлиди нисек эләккән? Төрөктәр, гәрәптәр, бер нисә европалылар исемлеге нисек тәҙәлгән дә, улар араһына Муссолини исеме ҡайҙан, ни өсөн барып ҡыҫылған? Был һорауҙарға тик Донован теге донъянан яуап бирә алыр ине, бәлки.

Марсель Ғафуров та, Радмир Хәсәнов та республикала билдәле шәхестәр. Ярай, журналист кешегә бер көн эсендә бер нисә ҡатмарлы мәсьәлә менән шөғөлләнеп, тиҙ арала баш мөхәррир өҫтәленә мәҡәлә һалырға кәрәк була. Бындай йәһәтлектең ыңғай яҡтары ла, тиҫкәре тарафтары ла була. Мәсьәләне йәһәт һәм бер ҡатлы итеп хәл итеү журналистың гәзәтенә лә әүерелеүе бар. Ләкин кеше һаулығы һәм ғүмере һағында тороусы медик профессорға, өҫтәүенә, парламент ағзаһына был сифат һис килешлә түгел. Ҡуян ҡыуып барышлай, етди мәсьәләгә асыҡлыҡ индереп булмай ул. Мәҡәлә һәм китап авторҙарына Башҡортостан ФСБ-һы етәксеһе Палагиндың интервьюһын һәм шул уҡ ойошмала күп йылдар хеҙмәт иткән Л.Ф. Соцковтың "Неизвестный сепаратизм. На службе СД и Абвера" исемле китабындағы Әхмәтзәки Вәлиди хаҡындағы биттәрҙе уҡырға тәҡдим итәм. Ғалим хаҡында мәғлүмәт туплауҙа иң ҙур тырышлыҡ күрһәткән ойошма - КГБ. Унда ла Вәлидиҙең фашистар менән хеҙмәттәшлек итеүе хаҡында ләм-мим бер һүҙ ҙә, бер киҫәк ҡағыҙ ҙа юҡ икән, был хаҡта имеш-мимеш һөйләү һәм иҫке гәйбәттәрҙе ҡабатлау Вәлиди хаҡында түгел, ә авторҙың үҙе хаҡында һөйләй.

Был тәңгәлдә ике абруйлы кешегә бер ваҡиға бәйән итер инем. Әле 2005 йылда Ҡаҙанда бик билдәле тарихсы профессор Искәндәр Ғиләжев беҙҙә оҙаҡ йылдар "фашистар ялсыһы, антисоветчик" тип йөрөтөлгән, фашистарға, ысынлап та, хеҙмәт иткән, һуғыштан һуң Мюнхенда СССР-ҙы өйрәнеү институтында, "Азатлыҡ" радиостанцияһында эшләгән Тамурбәк Дәүләтшиндың немец телендә сыҡҡан "Советский Татарстан" тигән күләмле китабын русса нәшер итте. Унда яҙылған күп фекерҙәр менән беҙ килешә алмайбыҙ. Әммә тарих фәне торғонлоҡта булмаһын өсөн бындай китаптар менән танышыу ҙа кәрәк. Ғаяз Исхаҡи, Саҙри Мәҡсуди эмиграцияла совет власын маҡтап түгел, хурлап йөрөнө. Беренсеһе үҙ эшмәкәрлеге фашистик Германияның союздашы Японияла ла алып барҙы. Ләкин ул татар әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусы, уның классигы булараҡ, үҙенә лайыҡлы урынын алды. Икенсеһе шул уҡ Стамбул университетында юриспруденция уҡытты. Сорбонна университетын тамамлаған был шәхес төрки халыҡтарҙың хоҡуҡсылары араһында иң мөһим урын биләй. Быға шатланырға ғына ҡала.

"Наҙанлыҡ - аргумент түгел", ти ғалимдар. Ә рус халҡы "Ашыҡһаң, кеше көлдөрөрһөң", ти. Был хәҡиҡәттәрҙе онотмау кәрәк. Башҡорттарҙан эмиграцияла өс ғалим ижад иткән. Улар: Әхмәтзәки Вәлиди, Абдулҡадир Инан һәм Ғәлимйән Таған. Татар тугандарҙан ундайҙар, бәлки, күберәктер. Форсатым булһа, уларҙың (Дәүләтшин кеүектәренең әҫәрҙәренән башҡа) хеҙмәттәрен тәржемә итеп, бер уҡ форматта, бер уҡ полиграфияла йөҙгә яҡын томда нәшеп итеп, халыҡтарыбыҙға бүләк итер инем. Ул ғалимдарға, халыҡтарыбыҙҙың үҙҙәренә был да мөһабәт һәйкәл уйлап сығарыу мөмкин түгелдер.

Эйе, гәзит биттәрендә, интернетта Ә.Вәлидигә төрлө гәйеп ташлау ҡайһы берәүҙәрҙең гәзәтенә әүерелдә. Уларға йомғаҡлап шундай яуап бирер инем.

Һуңғы ваҡытта Әхмәтзәки Вәлидигә яла яғыу менән "коммунист"-быҙ тип йөрөгән кешеләр мәшғүл булды. Улар үҙҙәренең гәзитендә, интернетта иҫке гәйепләүҙәрҙе ҡабатлай. Уларҙы яҙыусы һәм яҙғандарын ышанып ҡабул итеүселәр - өлкән йәштәге кешеләр. Ҡайһы берҙәре илгә ҙур файҙа килтергән шәхестәр. Вәлиди хаҡында ниндәй генә яҙғандарға ышанһалар ҙа, уларға ихтирамыбыҙ кәмергә тейеш түгел. Иҫкесә фекерләү һәм баһалау ҡалыптарынан ҡотолоу кәрәк, әммә был эш еңел түгел, айырыуса өлкән йәштә. Ә инде Вәлиди мираҫына, рухына килһәк, улар йәшәй һәм йәшәйәсәк.

**Һорау: Әхмәтзәки Вәлиди кеүек халҡыбыҙ тарихын өйрәнеүҙә киң ҡоласлы ҡараштың етмәүен йылдан-йыл нығыраҡ тоябыҙ. Халҡыбыҙ үҙ тарихын ҡан менән яҙған яҙыуын, ә уны ҡәләм менән Вәлиди кеүек яҙа алырлыҡ тарихсыларыбыҙҙың зарурлығын һеҙ нисек тояһығыҙ?**

- Ундай мохтажлыҡ кисермәгән халыҡ юҡ. Бөгөнгө буталсыҡ мәлдә бөйөк рус халҡы ла бындай тарихсыға мохтаж икәнен аңлай. Ә бына беҙҙә ундай ғалим ниндәй юл менән үҫеп сыға алыр ине? Уның шарттары күп, шул иҫәптән бер шәреҡ һәм бер Европа телдәрен яҡшы белеү. Вәлиди был тәңгәлдә лә беҙгә өлгө. Башҡортостан шарттарында юғары квалификациялы бер нисә ғалимдың формалашыуына килтерәсәк икенсе эш - Вәлидиҙең бөтә китаптарын, мәҡәләләрен башҡортсаға тәржемә итеп, 10 томдан да артығыраҡ торор академик баҫмаһын сығарыу. Был йыйынтыҡ өсөн бик күп төплө, нигеҙле аңлатмалар, комментарийҙар әҙерләргә кәрәк буласаҡ һәм был эштәр менән шөғөлләнгән йәш ғалимдарҙың офоҡтары киңәйеп, төплө тамырлы фекерҙәргә лә эйә буласаҡтар. Улар һуңынан халҡыбыҙҙың Шекспир трагедияһын хәтерләткән тарихын да яҙа алыу ҡеүәһенә эйә булырҙар. Бындай тарихи фән янында әҙәбиәт тә, бөтә мәҙәниәт тә яңырып, үҫә алыр ине.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**яҙып алды.**

---

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Йорт производствоһы

Һалабаштан ат япмаһын башҡорттар *урын септә, ҡыуғы, ҡамыш септә* кеүек уҡ үргәндәр. Септә һәм ат япмаһы үреү өсөн ҡулайлама бик ябай булған. Ул киртектәре булған таяҡ йәки тар ғына таҡтаға эленгән һалабаш (ҡыуғы йәки осока) уралған ағас киҫәктәренән торған; тирә-яғына септә эшләнәсәк туҡыма киҫәктәре һалынған. Һалабашлы ағас киҫәктәре (йәки уларҙы алмаштырыусы таштар) бер яҡтан икенсеһенә күсереп һалыу яръямында септә барлыҡҡа килгән (һүрәт). *Септә станы* шулай уҡ бик ябай булған һәм билдәле рус станынан бер нәмәһе менән дә айырылмаған.



Ул махсус таяуҙа йәки бүрәнәгә нығытылған киргәнән торған. Унда арҡыры ағас тирәләй ҡылыс аша һалабаштың ҡатланған ептәре тарттырыла; ҡылыс нигеҙҙә таҡ һәм йоп



ептәрҙе айырыу һәм махсус линейка яръямында һапланған һалабаш һыҙаттарын һуғыу өсөн ҡулланыла (һүрәт).

Тал сыбығынан башҡорттар төрө тырыздар үргән. Сусле матдәләрҙе (кесерткән, киндер, етен) эшкәртеү башҡорттарҙа бер үк ысул менән башҡарылған. Һабаҡтары билдәле ваҡытҡа һыуҙа тотоп ебетелгән, һуңынан киптерелгән һәм сүсте үҙегенән айырып алыу өсөн ҙур ағас *килеләрҙә төйгәс* яръямында төйөлгән. Бары тик Көнбайыш Башҡортостанда ғына ошо маҡсатта *талҡы* файҙаланылған. Кесерткән туҡымалар XVIII быуатта уҡ киң таралған булған, был хаҡта И. И. Лепехин, П. С. Паллас һәм И. Г. Георги иҫкә ала. Әммә XVIII быуаттың һуңында И.И. Лепехин башҡорттарҙың киндер сәсеүгә бик тырыш булыуын билдәләй, "сәнәки киндер туҡыма үҙенең сифаттары буйынса кесерткән туҡыманы күпкә уҙып китә". Киндер туҡыма XIX быуат һуңында киң таралған була. Етен иһә бик һирәк, Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш мөйөшөндә генә осрай. XVIII быуат һуңында, И.Г. Георги белдереүенсә, башҡорттар киндерҙе ҡалын һәм тар итеп һуға; киндерҙе лә, кесерткәнде лә һыуҙа ебетмәйҙәр, ә көҙгөһөн һәм ҡышҡыһын ҡоймаларға эләләр йәки ҡыйыҡтарға йәйеп һалалар; кипкән сүсте үҙегенән килелә төйөп айыралар. Хатта XX быуат башында ҡайһы бер урындарҙа башҡорттар киндерҙе һыулап ебетмәгән.

Епте башҡорттар гәҙәттәге орсоҡ яръямында иләгән.



*Ҡабатөбө* (һүрәт) уларҙа бик һирәк осраған, сүбәк һәм йөн оҙон ҡолғаға бәйләнгән. Йөндө тарау өсөн махсус ағас тараҡтар ҡулланылған (һүрәт).



Балаҫ һуғыу өсөн йөн ептәрҙе башҡорттар йәшелсә буяуҙарына буяған йәки буяуҙарҙы һатып алған. Үҙҙәре буяу өсөн *ҡыҙыл тамыр йәки ҡыҙыл буяу* (марена), *һыйыр теле йәки һары буяу* (серпуха) һәм *йәшел* төҫ өсөн *серетмә йәки көкөрт үләнен* (плауна) файҙаланған.

**Башҡортостандың халыҡ шағиры, һуңғы биш йылда Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың Мәғариф, фән, мәҙәниәт, спорт һәм йәштәр эштәре буйынса комитет рәйесе вазифаһын башҡарған олуғ шәхес Рауил Бикбаев ошо көндәрҙә үҙенең 75 йәшлек юбилейын билдәләне. Ғүмере буйы һүҙ сәнғәте өлкәһендә көс түгеүсе әҙиптең барлыҡ эшмәкәрлеге халыҡтың күҙ алдында: матбуғат баҫмаларында даими күренеп торған шиғри шәлкемдәре, поэмалары, публицистик яҙмалар, депутат фекерҙәре уны беҙгә яңы яҡтан аса. Быйыл баҫылып сыҡҡан "Көндәлектәр"е аша беҙҙең күҙ алдыбыҙҙа шәхес барлыҡ һыҙланыуҙары, әрнеү-үкенестәре менән килеп баҫа. Урыны-урыны менән шағир, әйтерһең, Хоҙай менән көрәшеп, яңғыҙы ҡалып, әңгәмә ҡора, бәхәскә инә. Рауил Бикбаев - һүҙҙең солтаны ла, ҡоло ла. Солтаны, сөнки ул һүҙҙәр менән үҙе нисек теләй, шулай эш итә: һүҙҙәрҙе үҙ уйҙарына буйһондороп, хатта бер үк һүҙҙәргә төрлө мәғәнә һалып, шиғри теҙмә килтереп сығара. Һүҙҙең ҡоло, сөнки ул һүҙ сәнғәтенән башҡа йәшәй алмай. Һүҙ сәнғәтенең виртуозы бөгөн "Киске Өфө" гәзите уҡыусыларына ҡайһы бер уй-фекерҙәрен еткерә.**

# УЛ ҺҮҘҘЕҢ

## Ул һүҙҙең

### ДЕПУТАТ ЯҘМАЛАРЫ

Дәүләт-Йыйылышы-Ҡоролтайҙа эшләү дәүерендә мин закон сығарыу эшенең яуаплылығы ифрат ҙур булған бик тә үҙенсәлекле ижад икәненә инандым. Закон һәр кемдең яҙмышына ҡағыла, шуның өсөн дә уның башынан аҙағына тиклем ғәҙел булыуы зарур. Замандаштарыбыҙҙың рухи тормошона ҡағылышлы закондарҙы әҙерләү ныҡлап өйрәнелергә тейеш, әгәр улар киләсәк быуындың яҙмышына бәйле икән, бигерәк тә етди мөнәсәбәт талап итә. Нисек кенә булмаһын, теләһә ҡайһы илдең теләһә ҡайһы закон проекты үҙенең граждандарының бөгөнгө һәм киләсәк йәшәйешен тәьмин итә.

**Конституция - төп китап.** Конституция - ул йәмғиәттең хоҡуҡи һәм әхлаҡи нигеҙҙәре, рухи ҡануны, әхлаҡи-юридик кодексы. Конституцияның нигеҙен тәшкил иткән ҡанундарҙы бер туҡтауһыҙ алыштырырға ярамай. Ҡанундар быуаттар өсөн түгел, меңъйыллыҡтар өсөн яҙыла.

2008 йылдың 24 декабрендә Башҡортостан Республикаһы Конституцияһының 15 йыллығына арналған республика ғилми-ғәмәли конференцияһын ошондай һүҙҙәр менән асып ебәрҙем: "Һәр бәндәнең үҙ ғүмерендә төп китабы була. Ҡөрьән - мосолмандарҙыҡы, Библия - христиандарҙыҡы, Талмуд - иудейҙарҙыҡы. Ә шулай ҙа, ниндәй дин тотоуына ҡарамаҫтан, һәр кемдең төп китабы ул - Конституция". Был ысынлап та шулай, сөнки ошо дәүләттә йәшәйһең икән, тап ошо китапҡа яҙылған закондар һине һаҡлай, ҡурсый, шул уҡ ваҡытта яуаплы ла итә.

Рухи көрсөк иҡтисади-финанс көрсөктән күпкә ҡурҡынысыраҡ. Рухи ярлылыҡ бик күп хәүеф менән янай. Закондарҙы күҙәтеү, Конституция статьяларына таянып йәшәү - әхлаҡи ҡиммәттәрҙе һаҡлауҙың төп юлы.

Рух конституцияһы, намыҫ конституцияһы - улар бергә бер-береһен тулыландырып торғанда ғына Дәүләт Конституцияһы эшләйәсәк. Ә әхлаҡи ҡағиҙәләр конституцияһы быуаттар буйына үҙенең принциптарын һәм нигеҙҙәрен үҙгәртмәй, бер ниндәй төҙәтеүҙәрһеҙ бөтөн һәм ғәҙел булып ҡала килә. Кешеләрҙең меңәр йылдар буйына булдырылған әхлаҡи конституцияһын көс менән үҙгәртергә ынтылып ҡарау ниндәй аяныслы һөҙөмтәләргә алып киләсәген беләмай ул. Конституцияның статьялары быуаттарға иҫәп тоторға тейеш, властың системаһына һәм замандың йүнәлешенә ҡарап тормайынса, уларҙың һәр саҡ халыҡҡа хеҙмәт итеүе зарур. Бөтәһе лә законға буйһонған, бөтә хоҡуҡи нормалар бер нимәгә лә ҡарамай үтәлгән илдең граждандары ерҙәге иң ирекле илдең халҡы булыр ине. Үкенескә ҡаршы, кешенең ҡапма-ҡаршылыҡлы тәбиғәте ул хыялды тормошҡа ашырырға ирек бирмәй.

Ә бит тәбиғәт закондарын боҙоуҙы күҙ алдына ла килтебеҙ - халыҡтар һәм илдәр был фажиғәләрҙе үҙ елкәһендә кисерҙе. Шуға ла мәңгелек әхлаҡи принциптарға даими рәүештә үҙгәрештәр индереп тороуҙы күҙ алдына килтереүе ауыр. Ул ҡағиҙәләр федераль йәки төбәк ҡағиҙәләре түгел бит, ә дөйөм халыҡ, дөйөм кешелек ҡанундары. Әхлаҡи принциптар һәм әҙәп закондары халыҡтың тормош-көнкүрешенән сығып, шулар нигеҙендә мәңгелеккә раҫланған. Этностарҙың, йәмғиәттең һәм илдең рухи ҡиммәттәрен һаҡлаусы был закондарға ерлеюктан ғына ҡағылырға ярамай, бигерәк тә үҙгәртергә һәм кире ҡарап сығырға тырышырға кәрәкмәй.

Конституция конъюнктуралы, бер көнлөк булырға тейеш түгел, бер минутлыҡ та, хатта этаплыҡ та була алреп булмай. Мәҫәлән, ерҙең тартыу көсө законы, энергияның, материяның һаҡланыу законы, Менделеев системаһы һәм башҡалар. Физика, химия закондары. Ул закондарҙы боҙоу һәләкәткә илтер, гармония урынына хаос барлыҡҡа килер ине.



**Милли-төбәк компоненты.** Тормош һәр саҡ үҙгәреп тора һәм үҫешә, әммә бөтәһе лә үҙгәртеп ҡоролорға тейеш түгел. Дәүләттең мәғариф стандартындағы милли-төбәк компоненты - мәктәптә белем һәм тәрбиә биреүҙең төп нигеҙе. Уны юҡҡа сығарырға тырышыу - этносты, милләтте юҡҡа сығара башлауға тиң. Бөгөн милли республикаларҙа мәғариф системаһын ҡаҡшаталар, ти. Иртәгә рус теленә һәм әҙәбиәтенә, Рәсәй тарихына, рустарҙың милли асылына ябырыласаҡтар. Һуңғы маҡсат - Рәсәй халҡын милли үҙаңы, үҙенсәлеге булмаған һәм тарихи хәтерен юғалтҡан зомбиға әйләндереү. Тар маңлайлы ура-патриоттар милли мәсьәләләге ундай хәйләкәр тенденцияларҙың хәүефле генә түгел, ә һәләкәтле икәнен аңларға һәләтһеҙ.

**Эшләмәгән закондар.** Эшһеҙлек - ул көрсөк һөҙөмтәһе, йәмғиәттең социаль сире. Унан да ҙурыраҡ бәлә - ул эшләмәгән закондар. Кешеләр эшләргә тейеш. Закондар эшләргә, саралар күрергә тейеш. Эшләмәгән закондар, йәғни законһыҙлыҡ - ул шәхси фажиғәнең дә, локаль һәләкәттәрҙең дә, донъяуи көрсөктөң дә сәбәбе. Беҙҙең илдә бик күп закондар эшләмәй. Бик күп закон сығарған акттар изге ниәттәр генә булып ҡала. Улар ҡағыҙҙа ғына ҡала, яңы тормошҡа, етешһеҙлекте бөтөрөүгә йоғонтоһо ла, рухи юғалтыуҙарҙы тергеҙеүгә бер ниндәй ҙә тәьҫире юҡ.

**Закон бурҙары.** Элек закондар халыҡ байлығын, йәғни аҡсаны, милекте, етештереү объекттарын, матди һәм рухи байлыҡты бурҙарҙан, уғрыларҙан, ҡаҙнаны талаусыларҙан, ришүәтселәрҙән һәм һәр төрлө сәлдереүселәрҙән һаҡлай ине. Хәҙер закондар халыҡтан урлап-талап йыйған бандит-олигархтарҙың милкен халыҡтан һаҡлай. Бөгөн хәйерселек сигендә ҡалған хәләл көс түгеүсе хеҙмәтсәндәрҙән һаҡлай. Бына һиңә закон- нисек борһаң, шулай борола. Бөтә илде талаусы бурҙар закон тарафынан яҡлана. Шундай емереү эше алып барыу өсөн махсус рәүештә хосусилаштырыу кеүек һәм башҡа закондар уйлап табылды. Бына ҡайҙа ул закондың ысын бурҙары. Законһыҙлыҡ тыуҙырыусы закондар. Закон сығарыусы, закон ижад итеүсе эшмәкәрлеге һәм законды һаҡлаусы эше. Улар бер-береһен тулыландырып торорға, хәҡиҡәт тантана итһен өсөн хеҙмәт итергә тейеш. Әгәр закон уны һаҡлаусы тарафынан боҙола икән, был закон боҙоуҙың иң ҙуры.

*Элек закондар халыҡ байлығын, йәғни аҡсаны, милекте, етештереү объекттарын, матди һәм рухи байлыҡты бурҙарҙан, уғрыларҙан, ҡаҙнаны талаусыларҙан, ришүәтселәрҙән һәм һәр төрлө сәлдереүселәрҙән һаҡлай ине. Хәҙер закондар халыҡтан урлап-талап йыйған бандит-олигархтарҙың милкен халыҡтан һаҡлай. Бөгөн хәйерселек сигендә ҡалған хәләл көс түгеүсе хеҙмәтсәндәрҙән һаҡлай. Бына һиңә закон- нисек борһаң, шулай борола. Бөтә илде талаусы бурҙар закон тарафынан яҡлана. Шундай емереү эше алып барыу өсөн махсус рәүештә хосусилаштырыу кеүек һәм башҡа закондар уйлап табылды. Бына ҡайҙа ул закондың ысын бурҙары. Законһыҙлыҡ тыуҙырыусы закондар.*

**Дәүләт кимәлендәге юристың эшмәкәрлеге.** Ул яманды язаға тарттырырға, ә изгелекте һаҡларға тейеш. Ул ғәйепләүсе лә, ул яҡлаусы ла. Нисек итеп ошо ике эште бер юлы атҡарырға? Уның фекере бер яҡҡа ҡырынайырға тейеш түгел. Хәҙистә ошолай тип әйтелһә лә:

*Имам өсөн иң изге эш -*
*иман итеү,*
*Мөъминдәргә ғәҙел хөкөм*
*таба алыу.*
*Яза биреп яңылышыуға*
*ҡарағанда*
*Хәйерлерәк ғәйебен*
*кисереп хataланыу.*

Намыҫлы булыу һәм тәрән аҡыл, ҡыйыулыҡ һәм тәүәккәллек, сабырлыҡ һәм ныҡлыҡ - бына ошо сифаттарға эйә булырға тейеш закон һаҡсыһы.

Достоевский баланың йәш бөртөгө хаҡында яҙа. Бөгөн - сабыйҙарҙың һәм өлкәндәрҙең йәше йылға булып аға. Билдәле юрист, Йәмәғәт палатаһы ағзаһы сит илгә урланған баланың, йәберһетелгән әсәнең хоҡуҡтарын яҡларға бара. Дан һәм маҡтау һүҙҙәре ул яҡлаусыға! Ләкин кем һуң миллионлаған йәтимдәрҙең, урам хәйерселәренең, ярлы ғаиләләрҙең меҫкендәрен, емерек өйҙәрҙә һыуыҡтарҙа туңыусыларҙы яҡлар? Халыҡты үҙҙәренең төп проблемаларынан ситкә тайпылдырып, урланған бер бала хаҡында һөйләп, телевидениеның бөтә каналдары саң ҡаға, матбуғат баҫмалары яҙып сыға. Нисәмә миллион кешеләре яҙмыш ҡулына ташланған халыҡ тураһында бер һүҙ ҙә юҡ, ләм-мим! Ҡайҙа исемдәре киң билдәле юристарҙың яҡлаусы һүҙе? Әлбиттә, һәр хеҙмәт өсөн түләргә кәрәк, билдәле белгестәрҙең эше юғары гонорарҙар менән баһаланырға тейеш. Ә ҡайҙан алһын һуң ул ас балалар үҙ хоҡуҡтарын яҡлаусылар өсөн аҡсаны? Урлаһындармы йәки талаһындармы?

**Рухи көрсөк яман.** Рухи көрсөк иҡтисади-финанс көрсөктәрҙән ҡурҡынысыраҡ, тип әйткәйнем инде. Рухи ярлылыҡ янай йәмғиәткә. Закондарға таяныу, Конституция статьяларына нигеҙләнеп эш итеү - әхлаҡи ҡиммәттәрҙе һаҡлауҙың төп гарантияларының береһе.

Мәктәптәрҙә дин нигеҙҙәре, дини мәҙәниәт дәрестәрен индереүгә беҙҙең йәмғиәт әҙер түгелдер шул. Ҡайҙа кадрҙар, ҡайҙа әсбаптар, уларҙы кем әҙерләйәсәк? Уҡыу-уҡытыу планындағы ниндәй ҡыҫҡартыуҙар һөҙөмтәһендә яңы дәрестәр индереләсәк? Мәктәптә белем биреү программаһына Аллаһ закондары дәресен ин-

***✓ "Торатау" тигән шиғырымда тәбиғи ҡомартҡыбыҙҙың халҡыбыҙға ҡарата ошондай әрнеүле һүҙҙәре бар: "Тауҙы йотоп ҡына туҡтамаҫтар, үҙеңде лә тереләй йоторҙар", "Мине юҡ итһәләр, үҙегеҙҙе тигеҙләрҙәр бик тиҙ ер менән".***

# СОЛТАНЫ ҡоло ла!

дереү һәм шул уҡ ваҡытта Дәүләт Думаһында халыҡҡа ҡаршы закондар сығарыу - йәш быуын быларҙың барыһын нисек итеп күңеленә ҡабул итергә тейеш?

Мәктәптәрҙә дин буйынса дәрестәр индерер алдынан иң юғары дәүләт кимәлендә, закон сығарыу кимәлендә ватан тарихын һәм рус әҙәбиәтен мәктәп һәм вуз әсбаптарында боҙоп күрһәтеүҙе, үҙәк телевидениелағы көс ҡулланыу һәм емереү нормаға әйләнгән тапшырыуҙарҙы, беҙҙең ватандаштарыбыҙға тиҫтә йылдар дауамында психик атака алып барылған вакханалияны тыйыусы саралар күрергә кәрәк. Баланың бер ҡолағын доға иркәләү менәнме ни, икенсеһе һүгенеү һәм әшәкелек ишетеп торғас? 1906 йылда үҙенең "Дәүләт Думаһына" тигән шиғырында 20 йәшлек Туҡай бына нимә тип яҙа:

*Ник баш бөктең залимнарға,*
*Ник тыңладың сүзләрен?-*
*Ах син, Дума, Дума, Дума,*
*Эшләгән эшең бума?*

Туҡайҙың был мөрәжәғәтнамәһе сәйәси сатираның өлгөһөнә әйләнде. Хәҙерге замана Рәсәйендәге Дәүләт Думаһының халыҡҡа ҡаршы сығарылған Закондары үҙенең шиғри-сәйәси ғәйепләүсеһен көтә.

## ҒАИЛӘ ҠИММӘТТӘРЕ ҺӘМ БАЛАЛЫҠ

Бына тағы ла бер йылыбыҙҙың аҙағына имен-аман етеп киләбеҙ. Башҡарған эшебеҙ тураһында уйҙар, иртәгәһе көнөбөҙ хаҡында хәстәрҙәр арта. Яңы йылды ҡаршы алыуҙы кеше тормошондағы иң уйсан байрамдарҙың береһе, тип әйтер инем. Минең өсөн был уйсанлыҡ йылдар үткән һайын арта барған һымаҡ. Ни тиһәң дә, яҙмыштарыбыҙҙың тотош бер өлөшө уҙғандарҙа тороп ҡала бит. Күпме шатлыҡ-һағышы, яҡты ваҡиғалары һәм үкенесле мәлдәре менән...

Башҡортостанда йылдарҙы бағышлап үткәреү йолаһы бар. Шуларҙың береһе "Имен бала саҡ һәм ғаилә ҡиммәттәрен нығытыу йылы" тигән бик мәғәнәле исем менән үткәйне. Бында кешенең йәшәйешен камил, бәхетле иткән ике мөһим төшөнсә - бала менән ғаилә - бик дөрөҫ, уңышлы бәйләп аталған. Улар борон-борондан йәнәш килгән, киләсәктә лә шулай буласаҡ. Ата-әсәһенә күрә - балаһы. Йәш быуын ниндәй тәрбиә ала, киләсәктә шундай ғаиләләр барлыҡҡа киләсәк.

Ә нимә һуң ул ғаилә ҡиммәттәре? Күпме тапҡыр аҡса алмашынған, сәйәси система үҙгәргән, техник ҡаҙаныштар ҙур-ҙур яңылыҡ алып килгән, ә был рухи төшөнсә донъя түңкәрелгәндә лә һаҡланып ҡалған. Ололарҙы хөрмәтләү, уларҙың кәңәшен тыңлап аҡыл туплау, балаларҙы инсафлы, милләттең теленә, моңона тоғро шәхес, хәҡиҡәтте яҡлар, яманлыҡты фашлар ҡаһарман, уңған, белемле итеп тәрбиәләү - һәр ғаиләнең мәңгелек маҡсаты һәм таяныҫы. Заман үҙгәргәндә лә улар шул килеш ҡала. Әлбиттә, һәр дәүерҙә халыҡтың фәлсәфәүи ҡарашына, теленә, моңона, социаль хәленә үҙенсә яңылыҡтар өҫтәлә. Әммә ниндәй генә ижтимағи ҡыйралыш булмаһын, ғаиләнең рухи нигеҙе, тәрбиә ҡағиҙәләре, әхлаҡи сәләмәтлеге һаҡлана икән, тимәк, милләттең киләсәге ышаныслы.

Ғаилә ҡиммәттәренән мәхрүм бала бәхетле була алмай. Халыҡтың быуаттан быуатҡа, быуындан быуынға күсеп килгән туған теленән, моңонан, милли китабынан, матбуғатынан, мәктәбенән айырылған, сәңгелдәк йырын, өләсәйҙәрҙең әкиәттәрен бәләкәй сағынан күңеленә һеңдереп үҫә алмаған сабый нисек камил, бөтөн булһын? Бөгөн күпме бала урамда барғанда ла кеҫә телефонын ҡолағынан алмай - улар өсөн ата-баба моңо ят, күңелен халыҡ күңеленән килгән ғәзиз ауаздар иркәләмәй.

Ғаиләнең иң ҙур ҡиммәте, әлбиттә, атай менән әсәй, уларҙың балалары, барыһының да татыу, иҫән-һау, ипле, тырыш йәшәүе. Сабый өсөн иң ҙур ҡәҙер - өлкәндәрҙең яратыуын, хәстәрен тойоу, ата-әсәгә иһә - балаларының хөрмәте, ихлас ярҙамы.

***Ғаилә ҡиммәттәренән мәхрүм бала бәхетле була алмай. Халыҡтың быуаттан быуатҡа, быуындан быуынға күсеп килгән туған теленән, моңонан, милли китабынан, матбуғатынан, мәктәбенән айырылған, сәңгелдәк йырын, өләсәйҙәрҙең әкиәттәрен бәләкәй сағынан күңеленә һеңдереп үҫә алмаған сабый нисек камил, бөтөн булһын? Бөгөн күпме бала урамда барғанда ла кеҫә телефонын ҡолағынан алмай - улар өсөн ата-баба моңо ят, күңелен халыҡ күңеленән килгән ғәзиз ауаздар иркәләмәй. Ғаиләнең иң ҙур ҡиммәте, әлбиттә, атай менән әсәй, уларҙың балалары, барыһының да татыу, иҫән-һау, ипле, тырыш йәшәүе. Сабый өсөн иң ҙур ҡәҙер - өлкәндәрҙең яратыуын, хәстәрен тойоу, ата-әсәгә иһә - балаларының хөрмәте, ихлас ярҙамы.***

Байтаҡ йылдар элек

*"Ниндәй шатлыҡ иң ҙур*
*шатлыҡ?*
*-Балаң килтергән шатлыҡ.*
*Ниндәй ҡайғы иң ҙур ҡайғы?*
*- Балаң килтергән ҡайғы",*

тигән шиғыр яҙғайным. Бала ла ошолай әйтә ала бит: "Ниндәй шатлыҡ иң ҙур шатлыҡ? Ата-әсәң биргән шатлыҡ. Ниндәй ҡайғы иң ҙур ҡайғы? Ата-әсәң килтергән ҡайғы".

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ата-әсәһен ҡайғыға һалған тәүфиҡһыҙ балалар, сабыйҙарын бәхетһеҙ итеп, эсеп-туҙып йөрөгән ата-әсә илебеҙҙә йылдан-йыл күбәйә. Уларҙан ниндәй генә ғаилә ҡиммәттәре булһын инде...

Ҡайһы саҡта кешене насар эштәре өсөн "хайуан", хатта "йыртҡыс" тип әрләйҙәр. Үҙ балаһынан баш тартҡан берәй бүрене, юлбарыҫты йәки башҡа йәнлекте беләһегеҙме? Ә бына яңы тыуған сабыйынан баш тартҡан йәш ҡатындар артҡандан-арта. Ата-әсәһе иҫән була тороп та, үкһеҙ етемгә әйләнгән балалар күбәйә. Хәҙер Рәсәйҙә былдай хәл һуғыш йылдарындағынан да ҡатмарлыраҡ, тип яҙалар. Ҡот осҡос фажиғә!

Яңыраҡ "Рәсәй" радиоһынан әҙәм ышанмаҫлыҡ хәбәр тыңланым. Көнбайыш илдәрендә, мәҫәлән, Норвегияла бала хоҡуҡтарын яҡлау маҡсатында "атай", "әсәй" тигән һүҙҙәрҙән баш тартырға, тик "родители" (башҡортса эквивалентын таба алманым) тип атарға өгөтләүселәр бар икән. Ошондай енәйәткә тиң һүҙҙәрҙе һөйләүселәр үҙен "Атай!", "Әсәй!" тип әйтергә зарыҡҡан, күҙгә өмөт менән мөлдөрәп ҡараған бисара етемдәрҙең урынына ҡуйып ҡараһын ине.

Ата-әсә өсөн иң ҡәҙерлеһе, ғаиләнең иң ҙур ҡиммәте - бала. Тарихҡа шундай аяныслы хәлдәр ҙә хас: илгә ҙур бәләләр килгәндә, йәшәр көн бөткәндә, балалары тере ҡалһын өсөн ата-әсәһе уларҙы һатырға мәжбүр булған. Ә бөгөн сабыйҙарҙы сит ил ғаиләләренә һатыуҙың сәбәбе нимәлә? Ниңә хөкүмәт бындай яман эшкә юл ҡуя?

Үҫеп килгән быуынға бәләкәй сағынан уҡ иғтибар итеү, күп балалыларға төрлөсә ярҙам күрһәтеү буйынса республикала мөһим саралар атҡарыла. Әммә йәш быуындың имен үҫеүенә, ғаиләнең матур йәшәүенә өлгәшеүе еңел түгел. Ҡайһы саҡта ата-әсә генә хәл итә алмаҫлыҡ ҡатмарлы хәлдәр ҙә килеп тыуа. Мәҫәлән, мәғариф өлкәһендәге ҡулайлаштырыу һөҙөмтәһендә күп мәктәп үҙгәртеп ҡоролдо, ҡайһылары бөтөнләй ябылды. Балаларҙы башҡа, йыш ҡына алыҫтағы ауылға йөрөтөп уҡытыуҙың ауырлығы етерлек: күп урында юлдар емерек, улар төҙөк булғанда ла, ҡышҡы буранларҙа йырып үтерлек түгел. Башланғыс класс уҡыусыларының, дәрестәр бөткәс, өйгә ҡайта алмайынса, өлкәнерәктәрҙе көтөп ҡаңғырып йөрөүе айырыуса аяныслы. Сабый өйгә хәлдән тайып ҡайта, ғаилә тәрбиәһен аҙ күрә. Шуны уйлап, ата-әсәнең дә йөрәге өҙгөләнә.

Былар - дәүләт кимәлендә генә хәл ителә ала торған ҙур мәсьәләләр. Шул уҡ ваҡытта шәхси яуаплылыҡ тураһында ла онотторға ярамай. Республикабыҙҙа күпме тырышлыҡтан һуң башҡорт теленә дәүләт статусы бирелде. Әммә сабыйға туған телгә һөйөү теле асылғанда уҡ һалынмаһа, фәтүә булырмы, тигән һорау тынғы бирмәй.

## ТӘБИҒӘТТЕ ҺАҠЛАУҘЫ КЕМ БАШЛАРҒА ТЕЙЕШ?

Уҙған быуат аҙаҡтарында иң тәүҙә Башҡортостанда барлыҡҡа килгән һәйбәт ғәҙәт - һәр йылды айырып исем менән атау - башҡа төбәктәргә лә таралды, Рәсәйҙә лә матур йолаға әйләнде. Әлбиттә, 12 айҙа ғына ҙур маҡсатҡа өлгәшеү мөмкин түгел. Әммә иғтибарҙы мөһим бер мәсьәләгә туплау уның әһәмиәтен, үҫеш йүнәлештәрен анығыраҡ билдәләй.

2013 йыл "Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы" тип аталды. Экология мәсьәләләренең үҙәккә ҡуйылыуы һәр кешенең шәхси яуаплылығы тураһында тағы ла нығыраҡ уйландыра. Һуңғы ваҡытта был өлкәлә дәүләт тарафынан мөһим эштәр башҡарыла, кәрәкле саралар күрелә, ләкин аҫыл тәбиғәтебеҙҙәге, йәшәгән йәки ял иткән ерҙәребеҙҙәге аяныслы хәлдәр предприятиеларҙа технологик талаптарҙың үтәлмәүенә генә түгел, кешеләрҙең шәхси яуаплылығына ла бәйле икәнлеген онотмайыҡ. Ҡалалар тирәһендәге баҡсаларҙы, матур йылға-күл буйҙарын кеше ташлаған сүп-сар баҫып бара. Бер ғәмһеҙҙең тәмәке төпсөгөнән йәки һүндерелмәй ҡалдырылған усаҡтан урмандарға ут тоҡана, һаҡһыҙлыҡ сәбәпле йорттар яна. Быға күпселек осраҡта йәмғиәт үҙе ғәйепле.

"Бәхетле булырға теләйһең икән, бәхетле бул!" тигән һүҙҙәр, бәлки, артыҡ ныҡ әйтелгәндер. Әгәр инде "Таҙа йәшәргә теләйһең икән, таҙа йәшә!" тиһәләр, бер ҙә үтәй алмаҫлыҡ эш түгел бит. Бәхеттең килгәнен көтөп ултырыу йәки тирә-яҡтағы аламалыҡҡа ҡул һелтәп ҡарау - был йәмһеҙ ғәҙәттәрҙе бөгөнгө заман ритмы ныҡлы кире ҡаға.

Хәҙер кеше таҙа һыуға, саф һауаға айырыуса мохтаж. Шулай ҙа тыуған тәбиғәтте һаҡлауҙа төп мәсьәлә - ер яҙмышы. Башҡортостан тарихы, асылда - аҫаба ерҙәрҙе һаҡлау, яҡлау өсөн көрәш тарихы ул. Бөгөн был мәсьәлә тағы ла ҡырҡыуланды. Хәҙер Башҡортостан ҡатламдарынан сыҡҡан нефткә, төбәк халҡы төҙөгән заводтарға, комбинаттарға, урманыбыҙға, башҡа байлыҡҡа хужа түгелбеҙ. Халыҡ ни тиклем хаҡлы талаптар ҡуйһа ла, улар үтәлмәй. Кешеләр еребеҙ яҙмышы өсөн ҙур яуаплылыҡ тоя, ләкин күп мәсьәлә дәүләт кимәлендә генә хәл ителерлек.

Халҡыбыҙҙың изге урыны Торатауҙы яҡлап, оло йыйындар үткәрелде, әммә тәбиғәттең был үҙенсәлекле ҡомартҡыһына һаман да ҙур хәүеф янай. Яңыраҡ "Торатау" тигән шиғырым донъя күрҙе. Унда тәбиғи ҡомартҡыбыҙҙың халҡыбыҙға ҡарата ошондай әрнеүле һүҙҙәре бар: "Тауҙы йотоп ҡына туҡтамаҫтар, үҙеңде лә тереләй йоторҙар", "Мине юҡ итһәләр, үҙегеҙҙе тигеҙләрҙәр бик тиҙ ер менән". Изге Торатауҙың һыҙланыуҙары бөтәбеҙҙән дә уяулыҡ, берҙәмлек талап итә. Халыҡ хәрәкәте менән бергә дәүләт юғарылығындағы аҡыллы ҡарарҙар ғына һәләкәттән һаҡлап алып ҡаласаҡ. "Кроношпан" заводы хаҡында ла төрлө фекерҙәр ишетергә тура килә: уны күтәреп алыусыларҙың мәғлүмәттәре ерлекле, нигеҙлеме һуң? Ә бына заводтың эшмәкәрлегенә ҡаршы сығыусылар факттарға нигеҙләнеп, халыҡтың сәләмәтлеге, милләттең киләсәге тураһында яр һала. Уйланырлыҡ урын бар, был бер көндә генә хәл ителә торған мәсьәлә түгел.

Яңы йылды төрлө илдә төрлө ваҡытта ҡаршылайҙар. Был ваҡиғаны донъяла йәшәгән һәр кем мотлаҡ һанай, яҙмышын билдәләр мәл тип иҫәпләй. Минең өсөн айырыуса уйсан була барған байрам алдынан тағы ла бер шиғырым иҫкә төштө:

*Яңы йыл килер,*
*килмәй ҡалмаҫ ул,*
*Иҫке йыл китер,*
*китмәй ҡалмаҫ ул.*
*Килер шатлыҡтар*
*килмәй ҡалмаһын,*
*Китер ҡайғылар*
*китмәй ҡалмаһын.*

Ошо теләктәремде ҡабатлап, ватандаштарымды етеп килгән Яңы йыл менән ихлас ҡотлайым!

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Юҡҡа ғына шағирҙарҙы, тормоштоң барометры, тип атамайҙар, тигән фекерҙе яңынан ҡабатлаһаҡ, моғайын, хата булмаҫ. Бар донъяның тын алышын тойоп, үҙенең яҙмалары, халыҡҡа әйтер һүҙе аша күңелдәрҙе һиҫкәндереп йәшәүсе шағир өсөн ҙур һәм бәләкәй проблемалар буламы икән? Юҡтыр, сөнки шәхестең асылы үҙенең иленән, теленән, еренән, халҡынан айырылғыһыҙ. Депутат вазифаһын яулаусы ижад кешеләре быға саҡлы ла булды, әммә ул хаҡта поэма ижад иткәндәрен хәтерләмәйем әле. "Граждандарҙы ҡабул итеү көнө" тип аталған ыҡсым йыйынтыҡҡа шағирҙың шиғри яҙмаһы ғына түгел, фәлсәфәүи уйланыуҙары ла урынлаштырылған. Сәсән теле, сатнатып әйтелгән фекерҙәр үҙҙәре бер поэмаға торошло: әйҙә, һәр фекерҙе үҫтер, байраҡ итеп майҙандарға алып сыҡ. Шағирҙарҙың һиҙгер йөрәгенә таянып йәшәй милләтебеҙ! Беҙ дөрөҫ юлда, ахыры, йәмәғәт!**

**Һөйләшеүҙе ҡағыҙға Лариса АБДУЛЛИНА төшөрҙө.**

***✓ Мараттың, "аҫылынып төшкәс", тиеүе мине уғата аптыратты. Ул уны шул тиклем еңел итеп, әйтерһең дә, көн дә булып торған ғәҙәти хәл кеүек әйтте. Кеше йоҡлай, ашай, эшкә йөрөй, уның араһында ... "аҫылынып төшә", имеш.***




Мәжлестең ҡыҙған мәлендә Вәхиттең күршеһендә йәшәгән Рәсих ҡорҙаш килеп инде. Вәхит планды бутамаһа, Марат менән беҙ уға һуғылырға тип тора инек.

- Әһә, ҡыҙышып алырға ла өлгөргәнһегеҙ икән. Һеҙҙе ҡойма ярығынан күҙәтеп торҙом. Мин бит элекке погран. Ҡайҙа нимә булғанын һәм булырға тейешлеген вис белеп торам. Ха, бында гел пограндар йыйылған дабаһа, стройбат Вәхиттән башҡа. Оҙаҡламай беҙҙең байрам, егеттәр. Сик буйына ҡуйыла торған бағана әҙерләп ятам, 9 май көнө тау башына, ауыл гранына, ҡуябыҙ. Марат, һиңә әйтелгән. Онотманыңмы? Һаумы, Руслан ҡорҙаш. Служак! Пограндарҙың бөтәһе лә миңә служактар. Тимәк, һин дә бағана ҡуйышаһың. Шәп буласаҡ. Советтар Союзы гербының һүрәтен китапхананан барып саҡ таптым. Шуны ҡалайға сүкеп төшөрөп бөтһәм, бағана әҙер буласаҡ, - Рәсих бер тынала булған бөтә хәбәрен теҙеп һалды. Уны, әйҙүкләп, мәжлескә ҡушылырға саҡырҙыҡ.

Рәсихҡа сәйерһенеп ҡарап ултырғанымды һиҙгән Марат, тәмәке тартырға сыҡҡанда, хәлгә асыҡлыҡ индерҙе.

- Яҙлы-көҙлө, зиһене тарҡалып, ауырып ала ул. Аҫылынып төшкәс, шулай булып ҡалды, - тине.- Былтыр атын юғалтып ай буйы эҙләне. Һатып, малайының уҡыуына түләргә тип йөрөй ине. Ҡыуып алып киттеләр. Ныҡ ҡайғырҙы. Бисәһе лә үҙәгенә үттереп әйткәндер - уларҙың телен ҡырҡып алып булмай, игәп игәйҙәр ир бахырҙы. Башын элмәккә тыҡҡан. Күреп ҡалып төшөрөп алдылар. Мейеһе зарарланып өлгөргән, күрәһең. Аҡылы инәле-сығалы хәҙер...

Мараттың, "аҫылынып төшкәс", тиеүе мине уғата аптыратты. Ул уны шул тиклем еңел итеп, әйтерһең дә, көн дә булып торған ғәҙәти хәл кеүек әйтте. Кеше йоҡлай, ашай, эшкә йөрөй, уның араһында ... "аҫылынып төшә", имеш. Кеше йәшәй-йәшәй үлемгә өйрәнеп тә китәлер. Илле йәшкә еткән ауыл ире күп тапҡырҙар мәйет йыйыштырыуҙа булып өлгөрә, кемдер бының үҙ хисабын алып баралыр, тип уйламайым. Иллә-мәгәр, ауылда кеше мәрхүм булһа, бер кем дә зыяратҡа барыуҙан ситтә ҡалмай.

Бала саҡта үлем ҡот осҡос ауыр хәл булараҡ ҡабул ителә. Тәүге үлем ҡайғыһын мин ололар менән дүрт-биш йәштәр тирәһендә кисерҙем. Күрше ауылда йәшәгән өләсәйем мәрхүм булып ҡалғайны. Торараҡ, саҡ ҡына үҫә төшкәс, үҙ күҙҙәрем менән күргән тәүге үлгән кеше ҡартәсәйем булыр, тип үҙ алдыма уйлағаным да хәтерҙә. Балаға ҡайһы саҡ шулай аңлатып биргеһеҙ ҡаты бәғерле була. Иң яратҡан кешемдең - ҡартәсәйем иң яратҡан кешем ине - үлеме тураһында шулай тыныс һәм эшлекле ҡиәфәттә фекер йөрөттөм.

Үҙ күҙҙәрем менән күргән үле кеше ҡартәсәйем булманы, ул - атайым ине. Ҡазаға юлығыуы тураһында ишетһәм дә, был хәбәр аңыма барып етмәне. Башҡалар кеүек иламаным. Уның ябыу менән ҡапланған йөнһеҙ кәүҙәһен өйгә индергәндә хәлһеҙ һәленеп төшкән ҡулын күргәс, ҡапыл быуылып төштөм. Атайымдың был донъяла юҡлығын бөтә булмышым, һәр күҙәнәгем менән тойҙом. Миңә туғыҙ йәш ине.

Рәсих ҡорҙаш, башҡалар кеүек, минең алдымда күҙ йәштәрен күрһәтмәне. Һүҙ нимәгә генә ҡағылһа ла, ул күтәренке кәйефтә ҡалды. Хәбәрен бүлдермәй тыңланылар. Уғата оҙонға төшөп китһә, туҡтап тороуын бик итәғәтле рәүештә үтенделәр. Шул тиклем инсафлы мөғәмәлә ғәжәпкә һалды. Тәүге көндә минә өҙә һуғып бүлгән Марат кеүек ҡыланыусы булманы.

* * *

Ғәлиәхмәт ағайҙы ла мин һәр саҡ көр күңелле, бошмаҫ кеше булараҡ белә инем. Ул урамдың был осонда йәшәүселәр араһында ҡалған берҙән-бер иҫ китмәле тәртипһеҙлек, мунсаһының мөйөшө мәңге ергә һеңгән килеш. Тәпәненә күрә ҡапҡасы, тигәндәй, еңгәйҙе лә бөтмөр хужабикә тип әйтеп булмай. Өйөн һуңғы тапҡыр инеп күреүемә күп йылдар үткән, хәҙер нисектер, элек баш тыҡҡыһыҙ була торғайны.

- Райхана инәйҙең өйө етемһерәп ҡалған. Кем йәшәй икән? - саҡ ҡына ҡыяраҡ ҡаршыла ултырған бәҫе ҡасҡан йортҡа ымлап күрһәтәм.

- Ҡыҙым Гөлбикә тора. Нигеҙ ҡороно. Апайым былтыр гүр эйәһе булды. Үкенерлек түгел, һикһәнде күпкә уҙҙырғайны. Бына ҡустылар иртәләнеләр. Марсты ерләгәнгә биш ай, ә Юнирҙе беләһең - үҙенә ҡул һалды, - Ғәлиәхмәт ағай күҙҙәрен һөрттө.

Әллә тормош шул тиклем аяуһыҙмы, хатта илай белмәгәндәрҙе лә йәшкәҙәттерә, әллә кемдән дә йәшермәй. Справкаһы һәр саҡ эргәһендә. Бөтә хәлдәрҙә лә шул ҡағыҙҙың файҙаһын күрә. Ауылдаштарына уның зыяны тейгәне юҡ, сит-яттарға һәр саҡ ҡаты ҡағыла. Аҙна һайын үткән баҙарҙан үҙенең яһағын йыйып ала. Ситтән килгән алыпһатарҙар уны белеп бөткәндәр, күпме бирергә лә беләләр. Ғилаж артығын алмай ҙа. Тәмәкелек һәм бүләк хаҡын ғына. Ә бүләккә ул һәр саҡ мохтаж. Ауылда булып торған бөтә туйҙа, юбилей ҡунаҡтарында ул мотлаҡ ҡатнаша. Саҡырылмай бара. Бүләге менән. Әҙерәк гармун да тыҙҡылдатҡас, мәжлестә ул һәр саҡ үҙ кеше. Ғилаж синыфташым Илдар мәрхүмдең ҡәйнеше. Ниһайәт, миңә лә иғтибар итте.

-Егеттәрский шәп икәнһең, Руслан ағай. Ҡартайырға уйламайһың да, - тине миңә ҡарап. - Ҡорҙашың, минең еҙнәйем оло кеше. Аҡһаҡал. Етмешкә етеп бара. Апайымдар йорто ҡапҡаһынан урамға сығыуымды күреп ҡалған ағай, үҙенең янына әйҙүкләне. Ул өй алдында урамды күҙәтеп ултыра ине.

- Себерҙәр ҡайталар ҙа, күҙ күрһәтмәй ҡунаҡ булып, кире олағалар. Беҙгә күстәнәстәре тәтемәй ҙә, - шаңҡылдата көлөп минең сәләмемде алды. - Көрәп алған аҡсағыҙҙың, исмаһам, ауылға тиндәрен һибеп китегеҙ, бәлки, шытым бирерҙәр.

- Хәбәрең элеккесә кинәйәле, Ғәлиәхмәт ағай. Нимәгә төрттөрөүеңде аңламаҫһың да.

- Төрттөргән юҡ, телгә нимә килә - шул ғына. Хи-ха-ха...

Айыуҙай ҙур кәүҙәле булһа ла, бала күңелле ул. "Ғәле балуан", тип йөрөттөләр үҙен. Бәлки, урыҫтың "болван" һүҙенән дә мәғәнә сығарғандарҙыр. Аҙағыраҡ уға тағы бер ҡушамат йәбештергәндәр икән - "Балу". Америка мультфильмындағы ососы аҡ айыу Балу исеменән алғандар. Халыҡтың тапҡырлығына иҫең китерлек. Ысынлап та, Ғәлиәхмәт ағай Балуның тап үҙе. Дәү кәүҙәле, балаларса ихлас, бер ҡатлы һәм бошмаҫ. Яңы теле асылған кескәй ейәнсәре урам буйлап сығып киткән дә, аҙашҡан. Илап йөрөгән баланы күреп, һин кем ҡыҙы, тип һорайҙар икән. Бала: "Әсәйем Гөлбикә, ҡартатайым Балу", - тигән һәм тап өҫтөнә баҫҡан. Өйөнә елтерәтеп алып барып ҡуйғандар. Ауылда Балуны белмәгән кеше юҡ. Ә Гөлбикәләр быуа быуырлыҡ.

"Үгеҙ үлһә - ит, арба ватылһа - утын", тип йәшәгән кешеләр рәтендә ул. Ҡоймалары уның һәр ваҡыт ҡыйыш, ишек алдында олоғая барған һайын кеше үҙгәрәме - алдымда бошмаҫ Ғәле балуан-Балу түгел, ә тештәре ашалып кесергән, сәстәре ағарған, күҙ нурҙары һүрәнләнгән бабай иламһырап ултыра. Уның төҫ-ҡиәфәте генә түгел, булмышы ла үҙгәргән, ҡартайған. Күңелемдә һаман һаҡланған элекке Ғәлиәхмәт ағай образының ваҡыт даръяһында ятып ҡалғанын әле генә тойомланым. Тағы бер юғалтыуға йөрәгем әрнене. Бала сағым һәм йәшлегем һуҡмаҡтарын нисек кенә табырға тырышһам да, бының мөмкин булмауын тағы бер мәртәбә аңланым. Улар тарая барған хәтерҙә һәм төштәрҙә - икенсе үлсәмдә - тороп ҡалған икән.

Беҙҙең эргәгә Ғилаж килеп ултырҙы.

- Балу ағай, күрәһеңме? - ул йоҙороғон төйҙө. Бармаҡтарының һырты бер нисә урындан һыҙырылып, ҡанһырап тора ине. - Кисә ике Орский пәрейҙәрен елтерәттем. Тештәренең эҙҙәре. Үтеп барһам, машиналарына саҡырып алдылар ҙа, ҡыҙҙар табып бир әле, тип бәйләнмәксе булалар. Руль артында ултырғанын шунда уҡ һөйрәп төшөрҙөм дә, бәргеләй башланым. Икенсеһе килеп сыҡҡайны, уны ла һалып осорҙом. Монтировкаға йәбешмәкселәр ине - кеҫәнән справканы сығарып күрһәттем. Ҡаңғырмағыҙ, һеҙҙе үлтереп ташлаһам да миңә бер ни булмаясаҡ, тигәйнем, йәһәтләп һыпырттылар.

Ғәлиәхмәт ағай Ғилаждың хәбәренә рәхәтләнеп көлдө. Уның, справка, тигәне аҡылының зәғифлеге тураһында дауахана биргән яҙыу-белешмә. Ғилаж үҙенең алйот булыуын бер мәрхүм, күптән тегендә. Үҙе теләп китте. Бисәгә үсеккән, имеш. Ахмаҡ. Аҫылынғанын ишеткәс тә, барып, һөйрәкләп ҡыйлыҡҡа сығарып ташлайым тигәйнем, ебәрмәнеләр. Ҡәберенә бер ус тупраҡ та һалманым...

Илдар, ысынлап та, бисәһе арҡаһында үҙенә ҡул һалып ҡуйҙы. Ҡатынын бөтөнләй белмәйем - беҙҙән йәшерәк ине. Бер ҡайтыуымда, юлдарыбыҙ киҫешеп, Илдар менән икәүләп өйҙәрендә табын ҡороп ултырғайныҡ. Ҡотһоҙ күренде миңә йорт эсе.

- Килен ҡайҙа? - тип һораным, кис булһа ла хужабикәнең ҡайтмауына ғәжәпләнеп.

- Әхирәтенең тыуған көнөнә киткәйне, - тине Илдар, нишләптер уңайһыҙланған һымаҡ. Шунан, бер килке тынып ултырғас, дауам итте: - Насар йәшәйбеҙ ҡатын менән. Нәфсеһе самаһыҙ. Аҡсаны ла ярата, түшәктә аунарға ла. Кәрһеҙһең, аҡса эшләй белмәйһең, тип мыҫҡыл итә, - Илдар, әллә илағанын да һиҙмәне, асыҡ күҙҙәренән субырлап аҡҡан йәштәрен дә һөртмәй, һөйләне лә һөйләне. Күрәһең, күңеленә шул тиклем әйтелмәгән аһ-зарын йыйған, быуа йырылғандағы кеүек, һүҙҙәр ағымы аҡты ла аҡты. Бөгөн-иртән Себеренә олаға типме, минән тартынып торманы. Ошо ваҡиғанан һуң күп тә үтмәне, ауылдан килгән сираттағы хатта уның үлеме тураһында ла ҡош телендәй генә хәбәр ҡыҫтырғайнылар.

Ғилаж көн һайын ауылды бер урап сыға. Шуға ла ауылдаштарының тын алышын унан да яҡшы белгән кеше юҡ.

- Кисә райондан түрәләр килде, мәктәпте ҡыҫҡартып яталар бит. Силсәүит, мәктәп директоры менән бергә ултырып, кемде эштән сығарырға исемлек төҙөгәндәр. Һинең ҡыҙың да бар исемлектә, Балу ағай, - тип ул икенсе һүҙгә күсеп китте.

- Яңғыҙы ике бала ҡарай, уны нисек ҡыҫҡартһындар? Закон ҡыҙым яғында, - Ғәлиәхмәт ағай көтөлмәгән был хәбәрҙән ҡапыл ҡуҙғып китте.

- Эйе, әллә кем законға ҡарап торҙо, ти...

- Сығарып ҡына ҡараһындар, районға барам, призидинтҡа яҙам!

- Мин китәйем, ағайҙар, Ғәбделхаҡ еҙнәйемдә йомошом бар ине, - тип Ғилаж урынынан ҡуҙғалды. Ул гел шулайта: ҡырмыҫҡа иләүенә таяҡ тыҡҡан кеүек, берәй хәбәр һалып, йыйын ғәмде ҡуҙғыта ла, халыҡ ҡыҙышып, кемуҙарҙан ҡысҡыра, талаша башлаһа, үҙе ситкә китә. Бәлки, шулай зиһене сәләмәт кешеләрҙән көлөүелер: мин түгел - һеҙ ахмаҡ, тиҙер. Бәлки, әйтелгән дөрөҫ һүҙенең шундай тауыш күтәреүенә аптырап, тиҙерәк китеү яғын ҡарайҙыр. Шуныһы мәғлүм: яманлыҡҡа барып эшләмәй быны. Алйот булһа ла, боҙоҡ түгел ул.

* * *

Ғәбделхаҡ ағай аҫҡы урамда йәшәй. Тиҫтә йылдар самаһы элек муллалыҡ бурысын үҙ иңенә алғайны, һаман шул юлда. Ул түрҙә ултырған аят мәжлестәрендә булғаным бар. Еренә еткерә, тырыша. Ҡарсығы мәрхүмә булып ҡалғас, ныҡ биреште, тинеләр был ҡайтыуымда. Нишләптер, уға барырға теләгән әбей юҡ, имеш. Етеш донъяһы, муллалыҡ дәрәжәһе булһа ла. Ғәбделхаҡ ағайҙың йәш сағындағы мажаралы тормошон белгәнгә күрә, абыстайлыҡҡа ымһыныусылар юҡтыр, тим.

Беҙгә һигеҙ-туғыҙ йәштәр тирәһе булғандыр. Марат менән кәртә артында уйнап йөрөйбөҙ.

- Ҡала әле, Руслан, стенала кеше эҙҙәре, - Марат таҡтала ҡалған бысраҡ таптарға ымланы. - Ғәбделхаҡ ағай кисә төндә бисәһен урам буйлап баҫтырып туҡмаған. Сипаратта һөт тартырға килгән Сәлимә еңгәйҙең әсәйемә һөйләгәнен ишеттем. Ошонда, һеҙҙең кәртәгеҙгә йәшенгән булған бисәһе, Ғәбделхаҡ ағай стена буйлап йүгереп кәртә башына менеп киткән. Эсеп алһа, стена буйлап йөрөй ала, тей.

- Кеше нисек стенала йөрөһөн инде. Алдатаһың, - мин дуҫыма ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла белмәй торҙом.

- Ҡара, бармаҡтары вис күренә. Бишәү, - ысынлап та яланаяҡ батҡаҡҡа баҫҡан кешенең эҙҙәре стенала айырым-асыҡ ярылып ята. Улар кисә генә юҡ ине. Төндә килеп сыҡҡандар. Бәлки, Марат дөрөҫтө лә һөйләйҙер. Уның белмәгән нәмәһе юҡ. Ололарҙың бөтә серҙәрен белә. Кәрәккәнен дә, кәрәкмәгәнен дә.

Ғәбделхаҡ ағай ҡапыл-ҡапыл өс-дүрт бисә алып айырҙы ла, үҙе лә ситкә китеп юғалып торҙо. Ете-һигеҙ йылдан һуң яңы ғаиләһе менән ауылға кире ҡайтты. Өй һалып сыҡты. Боралғаны, эсеп ҡаңғырғаны баш-

ИНТЕРНЕТТАН



# ИҢ ПОПУЛЯР БҮЛӘК...

## гаджеттар

■ Ҡытайҙа һөттөң антиканцероген сифаттарын асыҡлаған тикшеренеү үткәрелгән. Илань университеты белгестәре һөт аҡһымында булған ферменттарҙы тикшереп, бер пептид ферменттың ашҡаҙан яман шеше күҙәнәктәре үҫеше хәүефен булдырмауын асыҡлаған. Ферменттың һөҙөмтәһе уның концентрацияһына, яман шеш күҙәнәктәренә тәьҫиренең күләменә һәм оҙайлығына бәйле. Тикшеренеүҙең авторы Вэй Чжен Чен әйтеүенсә, был асыш ашҡаҙан яман шешенә ҡаршы препараттар уйлап табыуға булышлыҡ итәсәк. Элегерәк оло кешеләр өсөн һөт зарарлы тигән ҡараш йәшәй ине, әммә белгестәр белдереүенсә, һөттө самаһын белеп ҡулланыу организмды онкологик сирҙәрҙән һаҡлай.

■ Физиологтар ҡатын-ҡыҙ йөрәгендә һөйөү тойғоһо барлыҡҡа килеү серен асыҡлаған. Италия тикшеренеүсеһе Диего Местрипьери һынауҙар үткәргән. Билдәле булыуынса, ир-егет һәм ҡатын-ҡыҙ араһында һөйөү бик тиҙ тоҡана, тимәк, ғашиҡ булыуҙың төп сәбәптәренең береһе булып тышҡы ҡиәфәт тора. Ғашиҡ булыу өсөн ҡатын-ҡыҙ ир-егетте ниндәй итеп күрергә тейеш һуң? Һынауҙар барышында асыҡланыуынса, ҡатын-ҡыҙ ир-егеттең йөҙөнә ҡарап, уның ниндәй атай буласағын тойомлай ала икән, был һәләт уға тәбиғәттән һалынған. Бер төркөм ир-егеттәргә ололарҙың һәм балаларҙың фотоларын күрһәтеп, үҙҙәренә оҡшаған фотоларҙы билдәләргә ҡушҡандар. Ҡатын-ҡыҙҙар төркөмө иһә был экспериментта ҡатнашыусы ир-егеттәрҙең фотоларын ҡарап, уларҙың ҡайһылары менән ғаилә ҡора алырҙарын билдәләгән. Шуныһы ҡыҙыҡлы, ҡатын-ҡыҙҙар бәләкәй балаларҙың фотоларын оҡшатҡан ир-егеттәрҙе һайлаған.

■ Microsoft компанияһы Яңы йыл алдынан Европала йәшәүселәр араһында һорау алыу үткәргән. Уның темаһы - Яңы йылға кем ниндәй бүләк көтә һәм үҙе ниндәй бүләк һатып ала? Донъяла иң популяр бүләк булып гаджет тора икән. Парадокс, әммә был әйбер кешелә стресс тыуҙырыусы араһында беренсе урында тора. Microsoft үткәргән тикшеренеү 18 илдә, шул иҫәптән Рәсәйҙә лә барған. 78 процент яуап биреүсе бүләк итеп техник йыһаздар алырға теләр ине. 54 процент ир-егеттәр һәм 38 процент ҡатын-ҡыҙҙар ниндәй техника теләүҙәрен аныҡ белә.

■ Психологтар белдереүенсә, аралашҡан ваҡытта кешеләр гел генә бер-береһенең күҙенә ҡарамай, был дөйөм ваҡыттың 60 процент тирәһен ала. Күҙгә-күҙ ҡарашыуҙың был сиктәрҙән ситкә сығыуы ике осраҡта ғына була, ти белгестәр. Беренсеһе, ғашиҡ булған кешеләр бер-береһенең күҙенә оҙағыраҡ ҡарай. Икенсе төркөмгә нимәгәләр асыуланған, агрессив кешеләр инә. Шуға ла, әгәр таныш булмаған кеше һеҙгә оҙаҡ итеп ҡарай икән, был йәшерен агрессия тураһында һөйләй. Ҡатын-ҡыҙҙар үҙҙәренә оҡшаған ир-егеткә оҙағыраҡ ҡарай, ә ир-егеттең ҡарашы уның һеҙгә булған ыңғай мөнәсәбәте тураһында һөйләмәй. Тура ҡараш ғәҙеллек һәм асыҡ булыу сифаты тураһында белдермәй. Ә бына күҙ ҡараһы аҡылға буйһонмай, уларҙың киңәйеүе кешенең һеҙҙең менән ҡыҙыҡһыныуын белдерә.

СӘЛӘМӘТЛЕК ҺАБАҠТАРЫ

# ҺЫНАУҘАР...

## еңеүҙәр өсөн ойотҡо

### Нимә ул "баш" сире?

Уҡыу йылын көс-хәлгә тамамланым."Сир - аш түгел инде ул", ти торғайны оләсәйем. Ә бында - баш. Һыҙлауына түҙәлмәй, ҡайҙалыр ҡуйып торғо килә шуны. Дауаханаға барыр форсатым юҡ. Имтихандар, мәктәп баҡсаһы... Аҡса яғы таҡыр. Баш сирҙәренән диагноз ҡуйылыуы ла икелерәк. Дарыуҙарына ла ышанысым ныҡтан түгел. Каникулды саҡ еткереп, башымды дауаларға тотондом. Үҙем һатып алған "Фитотерапия" китабында металдарҙың шифаһы тураһында мәғлүмәт бар ине. Баҡыр (Сталин мәлендәге һәм Хрущев заманынан ҡалған) аҡсаларҙы эҙләп алдым. Китапта яҙылғанса, ауыртҡан ерҙәремә ҡуйып ҡараным. Йәбешһә, дауалай, тиелгән. Йәй буйы маңлайымдан төшмәне теге аҡсалар. Онотолоп, урамда кешеләрҙе аптыратыуым әҙ булманы. Әммә көҙгә һин дә мин барып индем. Хатта һәр йыйылыш аҙағынан була торған мигрень да ҡайҙалыр юҡ булды.

Коллегама фибриома тип диагноз ҡуйғайнылар. Дауалауҙан үткән, операцияға китергә тейеш Өфөгә. Баҡыр аҡса йәбештереп ҡараныҡ. Йәбешә! Аҡсаларҙы теҙеп, билдәмә эшләне. Күпме тағып йөрөгәндер инде. Бысаҡ аҫтына ятыу кәрәкмәне.

### Нимә ул "хроник сир"?

Мирзакәрим Норбеков тигән табип бар. Ул, ҡайһы бер кешеләрҙең сирҙән дауалап булмай, сөнки "геморрой"ҙары башында, ти. Тормошта бындай миҫалдар тулып ята. Инвалидлыҡ буйынса комиссияны тапай бирәү. Үҙе үләндәр дауаһын һәйбәт белә, әммә дауаланырға ғваҡыт табалмай. Инвалидлыҡ буйынса аҡса килһен өсөн сире менән йәшәргә тейешлеген дә, аҡсаның дарыуға китеп торасағын да аңлатып булмай. Күптәр сире менән бергә "сиам игеҙәге"нә әйләнеп бөткән. Аптырайһы түгел...

### Сираттағы һынау

Торған ерҙән ҡаттым да ҡуйҙым. Күкрәк эсендәге ауыртыуҙы бер нисек тә һүрәтләп булмай. Ул шундай дәү, тынҡыслап тултырылған һымаҡ. Аяҡ атламай, ҡулым күтәрелмәй, телемдә тоҡан. Баяғы "Фитотерапия" китабында "Валериана дауалай" тигән мәҡәлә бар ине. Тамырынан бәләкәй генә мендәр эшләргә, һис булмаһа, ҡулъяулыҡҡа төрөп, еҫкәргә, тиелгән. Телевизор ҡарайһыңмы, китап уҡыйһыңмы, әңгәмәләшеп ултыраһыңмы, йоҡларға ятһыңмы - еҫкәйһең. Йоҡоһоҙлоҡтан да дауалай. Тик сама белергә кәрәк. Артығы, киреһенсә, көндөҙ йоҡомһорап йөрөүгә килтереүе мөмкин. Шулай уҡ валериана гипертониктарҙың да (күберәк ваҡыт талап итә), гипотониктарҙың да ҡан баҫымын көйләй, самала тота. Валериана тамсыларын эсеү күберәк аш һеңдереү системаһына яйлы. Ә йөрәк-ҡан тамырҙары һәм нервылар системаһы өсөн үләнен еҫкәү яҡшыраҡ ярҙам итә. Был, бәлки, бауырҙың барьер ролен үтәп, ҡайһылыр матдәләрҙе тотҡарлап ҡалыуына бәйлелер. Әммә ошо ысул мине лә сираттағы афәттән йолоп алды.

### Енәйәт һәм яза

Сибайҙа белем камиллаштырыу курстарында йөрөйөм. Ят гөлгә күҙ төштө. Ҡайтыр саҡтараҡ гөлдөң бәләкәй генә ботағын өҙөп алдым. Һөт кеүек шыйыҡсаһы сыҡты. Молочайҙар төркөмөнән булған үҫемлектәрҙең барыһында ла була ул. Тик сослоғомдоң әжере һайыраҡ булып сыҡты. Нишләптер, күҙемде ыуғанмын да, түҙ генә, ҡабаҡтары ут булып яна. Рефератымды көс-хәлгә яҙып бөттөм. Әлдә иртәрәк торғанмын. Күҙ йомолған, ҡабаҡтары мендәрҙәй булып ҡабарған. Шул саҡ ҡыҙымдан ишеткән хәбәр иҫемә төштө. "Әхирәтемдең бөйөрө насар эшләй шикелле, көн дә күҙ ҡабаҡтары шешеп килеп тора. Ас төкөрөк менән бөтөрә шешмәктәрен", - тип ҡайтып һөйләгәйне ҡасандыр. Хәл юҡ. Тотондом процедураға! Сәғәт ярым тигәндә, ҡайтты элекке хәленә күҙем. Дәрескә лә өлгөрҙем мәленә...

### Осраҡлы хәлдәр юҡ, тиҙәр...

Һәр иртә быҙауҙы ҡушам да, һыйыр эйгәнсе һарайҙы көрәйем. Ә был юлы яңғыҙ ғына ятҡан тиҙәкте алып ташларға ынтылған ерҙән кире уйланым. Алыпһатар ҡатын пәйҙә булғанда, аласыҡта ниҙер эшләй инем. Елеп, тарбай бармаҡлы ҡулдарын алға һуҙып, һарайға үтеп китте. Үҙенең күҙҙәренән йәш сөбөрләй. Бер аҙҙан һыйыр тиҙәгенә буялып килеп тә сыҡты. Усында һатырға тип алып килгән пистондары шартлаған икән. Һыҙлауына түҙә алмайынса, ҡулдарын һыйыр тиҙәгенә алып барып тыҡҡан. Ишек алдына ултырғыс сығарып ултыртып, ҡатынға һут эсерҙем дә, эштәрем менән сығып киттем. 2-3 сәғәттән әйләнеп килеүемә, ул ҡулдарын йыуған да мине көтөп ултыра. "Әлдә һыйырыңдың тиҙәге булды. Ике усым да янғайны, бындай ҡулдарым менән нисек көн итер инем", тип, ҡыуана-илай рәхмәтен яуҙыра. Устарын, беләҙеген миңә күрһәтә: "Бына, тиҙәк теймәй ҡалған урында ғына ҡалған һыулы күперсек. Белеп ҡуй был дауаны, кәрәге тейеүе бар",- тип тә өҫтәне.

Бешеүҙең нимә икәнен белмәһәң, "фу" тип, эре сирттерергә лә булыр ине. Яраң ҡасан төҙәлә лә, ул төҙәлгәнсе, һине сабый кеүек итеп кем ҡарай? Бындай яраларҙан ҡалған мөһөрҙө лә иҫәпкә алһаң... Бер нисә сәғәт эсендә төҙәлгән, таҙа, һау тирене күреү мөғжизә булды минең өсөн. Быға тиклем быуындар шешеүен тиҙәк урап дауалағандарын ишеткәнем бар ине. Үҙем, Ҡағы урыҫтары өйрәтеүе буйынса, емеш ағастарының яраларын тиҙәк һылап дауалайым.

### Дауаң үҙеңдә

Коллегам һөйләгәйне. Туҡан ҡасабаһында эшләп йөрөгән сағында тәне күгәреп, эшкә бара алмай ятҡан. Хәлен белешергә килгән лаборант "Мәлендә генә сепрәкте һейҙеккә сылатып бәйләһәң, тәнең күгәрмәҫ ине", тип өйрәткән. Көтмәгәндә был сараны үҙемә ҡулланырға тура килде. Мал ҡарап йөрөгәндә, эйеләйем, тигәнсе, һыйыр башын ҡалҡытты. Мөгөҙө маңлайымдың ҡап уртаһына бәрелде. Йәһәт кенә һейҙек менән компресс эшләнем. Сәғәттән ашыу ултырырға тура килде. Һыҙлауы байтаҡҡа һуҙылһа ла, маңлайым күгәрмәне. Һуңынан ҡыҙым аяғын имгәткәндә лә ошо дауа килеште кимәлйегән ерено.

Әммә иң фәһемлеһе, иң хәүефлеһе һуңғараҡ булды. Ҡаты итеп һыуыҡ тигеҙҙем. Тамаҡ ауыртыуы тиҙ арала эскә, ҡурылдайҙарға төшөп китте. Хәлһеҙлектән шыбыр тирләйем, кейемем һығып алмалы була. Дауаханаға ятҡан хәлдә лә дарыуҙары юҡ. Аптекалар буш, ҡулаҡсаһыҙ инеп тә булмай. Эш хаҡын бөтөнләй күргәнебеҙ юҡ. Ҡыҙымдың пособиеһы шәкәр-сәйлек кенә.

Оҙон таҫтамалды һейҙеккә сылатып, күкрәкте ураттым. Өҫтөнән полиэтилен бәйләнем. Ҡымшанмай ҙа таң аттырғанмын. Иванов системаһынан һуң икенсегә күрҙем: эскә ни тиклем әкәмтөкәм һыя ала икән. Төкөрөп кенә өлгөр. Таҙарынып бөткәнсе, ҡулъяулыҡ урынына таҫтамал төшмәне ҡулдан... Аҙаҡ "Уринотерапия" тигән китап килеп инде ҡулға.

### Сараһыҙҙан...

Ҡаланан туғаным ҡайтып төштө. Беләге шеш. Эсенә һарыһыу йыйыла. Дауахана һауыҡтыра алмаған. Медуниверситеттағы дуҫы бер дарыуҙы һынап ҡарарға тәҡдим итә икән. Минән "Ни кәңәш итерһең?" тип һорай. Күргәнем бар ундай сирлеләрҙе. Шештәге һыуын алған һайын күберәк һәм тиҙерәк йыйыла. Күрәләтә үҙ өҫтөндә һынау үткәртеү ҙә һауығыуға ышаныс бирмәй. Ундай сирҙе дауалау тәжрибәм дә юҡ. Ә ул "Нимә эшләтһәң дә, тыңлайым" тип өҙөлөп, "Дауала инде" тип ныҡыша ғына. Йәй мәле ине. Күләме ике тапҡыр кәмегәнсе һейҙек ҡайнатып, компресс эшләй башланыҡ. Бер көн һейҙек компресы, икенсе көн юл япрағы бәйләнек. 15-20 көн тигәндә шеше шинде, һарыһыуҙан бер нәмә лә ҡалманы.

### Хикмәт

Бала саҡ. Йылғала һыу ингәндә ҡолаҡҡа һыу инде. Ғәҙәттә, күпмелер ваҡыттан был һыу ағып сыға торғайны. Был юлы төпкәрәк киткән булып сыҡты. Ҡолаҡтың эсе шеште. Көн дә унан эрен ҡойола. Өйҙәгеләрҙең барыһы ла бесәндә, берәүҙең дә миндә ҡайғыһы юҡ. Киреһенсә, өйҙәге бар эштәр минең елкәлә. Ҡолаҡты йыуам да, мамыҡ менән көпләйем. Күпмелер ваҡыттан һуң уң ҡолағым ишетмәй башланы. Ул саҡтарҙа сәйҙе самауырҙа ҡайната инек. Ҡайын күмере йәки тубырсыҡ менән. Самауыр йырлай-йырлай ҡайнай. Ә мин уның торбаһына ҡолаҡты алмаш-тилмәш ҡуям да, самауыр йырын тыңлап ултырам. Ҡолағым ишетә башламаны икән, тип, әленән-әле башҡа тауыштарға ла ҡолаҡ һалам. Шулай "дауалана" торғас, хәл арыуланыуға китте. Йылдар үткәс кенә башыма барып етте: мине бит шул самауыр дауалаған. Күмеренең, тубырсыҡтың төтөнө, шифаһы менән!



**Көнһылыу ҠОТЛОБАЕВА.**
**Бөрйән районы.**
**(Дауамы бар. Башы 50-се һанда).**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# ҮҘЕ ЛӘ СИРЛӘЙ,

## башҡаға ла көн бирмәй



**Үҙенә үҙе теләп сир һатып алған, сәғәт һайын, көн һайын шундайын да теүәллек һәм ләззәт менән үҙ ғүмерен ҡыҫҡартыуға булышлыҡ итеүсе кешене күргәнегеҙ бармы? Ә бит улар аҙым һайын! Улар беҙҙе өйҙә лә, эштә лә, урамда ла - бөтөн ерҙә уратып алған. Уларға беҙ шул тиклем өйрәнгәнбеҙ һәм әлеге шөғөлдәренә шул тиклем күнгәнбеҙ, күнеккәнбеҙ - иғтибар ҙа итмәйбеҙ.**

Кемдәр тураһында һүҙ барғанын аңлағанһығыҙҙыр, моғайын. Эйе, тәмәке көйрәтергә яратыусылар хаҡында һүҙ. Был хаҡта ифрат күп яҙабыҙ, һөйләйбеҙ, тәнҡитләйбеҙ, әммә шул уҡ ваҡытта Роспотребнадзор мәғлүмәттәре буйынса һуңғы 20 йыл эсендә илдә тәмәкеселәр һаны 440 меңгә артҡан. Бөгөнгө көнгә ирҙәрҙең 50 проценты, ҡатын-ҡыҙҙарҙың 10 проценты ошо зыянлы ғәҙәтте үҙ иткән. Ә инде был һандан сәстәр үрә тора: 17 йәшенә ҡарай үҫмер малай-ҡыҙҙарҙың 93 проценты тартып ҡарай икән.Тәмәке донъяла көн һайын 8 мең кешене теге донъяға оҙата. Тап тәмәке тартыу үпкә яман шешенән үлеүселәрҙең - 90 процентының, ҡурылдайҙан - 75, йөрәк сирҙәренән үлгәндәрҙең 25 процентының үлеме сәбәпсеһе булып тора.

Сигарет эсенә 30-ҙан ашыу төрлө үлемесле ағыу, яман шеш сиренә килтереүсе химик матдәләр тәрәлгән. Шуларҙың бер нисәүһен генә атап китеү ҙә етәләр. Никотин - ул кеше ағзалары һәм системаларына үлемесле тәьҫире яғынан беренсе урында тора, бер нисә ҡап тәмәкелә уның һәләкәтле дозаһы тупланған. Никотин иң тәүҙә нервыларҙы ағыулай. Тәжрибәләрҙән күренеүенсә, уның хатта аҙ ғына дозаһынан да нервы күҙәнәктәрен ярһытыуы, һулышты һәм йөрәк тибешен йышайтыуы, йөрәк эшмәкәрлегенең боҙолоуына, күңел болғаныу, ҡоҫторою кеүек хәлдәргә килтереп еткереүе күҙәтелә. Ә ҙур дозаларҙа үҙәк нервылар системаһы күҙәнәктәре эшмәкәрлеге боҙола, һөҙөмтәлә тәмәкесене фалиж һуғыу ҡурҡынысы килеп тыуа. Шул уҡ ваҡытта тәмәке тартыу вегетатив нервылар системаһын да зарарлай, ә был иһә эшкә һәләтте түбәнәйтеп кенә ҡалмай, ҡулдар ҡалтырана башлай, хәтер юғала. Никотиндың эске секреция биҙҙәренә йоғонтоһо ир-егеттәр өсөн айырыуса хәүеф тыуҙырыуын билдәләп үтке килә. Енси биҙҙәргә тәьҫир итеп, никотин көслө енес вәкилдәрендә енси көсһеҙлек - импотенция барлыҡҡа килтерә. Ындай осраҡта дауаланыуҙан алда тартыуҙы бөтөнләй һәм мотлаҡ ташларға ҡушалар, сөнки шунһыҙ дарыуҙарҙан шифа булмаясаҡ.

Балалар һәм үҫмерҙәр, ҡатын-ҡыҙҙар араһында тартыусыларҙың арта барыуы айырыуса хафаға һала. Тикшереүҙәрҙән күренеүенсә, өлкән класс уҡыусыларының - 50, ә ҡыҙҙарҙың 40 проценты тарта. Уларҙың нығынып етмәгән нервылар һәм ҡан әйләнеше системаһы тәмәкегә тиҙ бирешә. Оҙағыраҡ тартҡан һайын кешенең был яман ғәҙәттән вафат булыу ихтималлығы ла арта бара. Рәсми тикшеренеүҙәр тәмәке тартыусыларҙа ҡыҙыл үңәс, ашҡаҙан, тамаҡ һәм бөйөр яман шешенең, канцероген матдәләр тәьҫире һөҙөмтәһендә аҫҡы ирен яман шеше кеүек сирҙәрҙең дә йыш осрауын билдәләй. Тәмәкенең хроник бронхитҡа килтереүен тәмәке тартмаусылар ҙа яҡшы беләләр, сөнки ундай сирлеләр даими йүткереүҙәре менән генә түгел, ә ҡарлыҡҡан тауышы, шешенгән йөҙө, ғыжылдап ишетелгән һулышы менән дә әллә ҡайҙан танылып тора. Юҡҡа ғынамы ни табиптар бала саҡтан алып тарта башлаған тәмәкесенең үпкәһен сереүгә дусар ителгән ҡап-ҡара масса менән сағыштыра. Һәм, ысынлап та, 15 йәштән көйрәтә башлаған ҙур стажлы тәмәкеселәр башҡаларына ҡарағанда үпкә яман шешенән 5 тапҡырға йышыраҡ һәм 55-60 йәшкә лә етмәй үлә.

